**Башҡортостан Республикаһының фән һәм мәғариф министрлығы**

**Башҡортостан республикаһы Баймаҡ районы**

**Муниципаль белем биреү бюджет учреждениеһы**

**Ереәнсе Төркмән урта дөйөм белем биреү мәктәбе**

| Ҡаралған | Килешелгән | Раҫланған |
|---|---|---|
| Башланғыс кластар берекмәһе ултырышында | Директор урынбаҫары | Мәктәп директоры |
| Ихсанова Ф.Н | Нигматуллина Ф.К. | Ҡаһарманова З.С. |
| Протокол №1 | 29.08.2023. | Приказ № 146 |
| 28.08.2023 | | 30.08.2023 |

**1-4 кластар өсөн**
**" Башҡорт теле" нән**
**эш программаһы**
**2023-2024 уҡыу йылы**

**Төҙөнө: Маннанова Г.С.**
**Төркмән- 2023**

УҠЫТЫУ ТУҒАН (БАШҠОРТ) ТЕЛДӘ АЛЫП БАРЫЛҒАН ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ ОЙОШМАЛАРЫНЫҢ 1-4- СЕ КЛАСТАРЫ ӨСӨН «ТУҒАН (БАШҠОРТ) ТЕЛЕ» УҠЫУ ПРЕДМЕТЫ БУЙЫНСА ЭШ ПРОГРАММАҺЫ

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

АҢЛАТМА ЯҘЫУ
«Туған (башҡорт) теле» уҡыу предметына дөйөм характеристика
«Туған (башҡорт) теле» уҡыу предметын өйрәнеүҙең маҡсаты һәм бурыстары
«Туған (башҡорт) теле» предметы буйынса өлгө программаның төп йөкмәтке йүнәлештәре
«Туған (башҡорт) теле» уҡыу предметының уҡыу планындағы урыны
1-се класс
2-се класс
3-сө класс
4-се класс
БАШЛАНҒЫС ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ БАҪҠЫСЫНДА «ТУҒАН (БАШҠОРТ) ТЕЛЕ» ПРЕДМЕТЫ ПРОГРАММАҺЫ ПЛАНЛАШТЫРҒАН ҺӨҘӨМТӘЛӘР
Шәхси һөҙөмтәләр
Метапредмет һөҙөмтәләр
Предмет һөҙөмтәләре
1-се класс
2-се класс
3-сө класс
4-се класс
ТЕМАТИК ПЛАНЛАШТЫРЫУ
2-се класс

## АҢЛАТМА ЯҘЫУ

Туған (башҡорт) телдә уҡытылған белем биреү ойошмалары өсөн башланғыс дөйөм белем биреүҙең 1-4-се кластары өсөн «Туған (башҡорт) теле» предметының өлгө эш программаһы уҡыу йылдары буйынса предмет йөкмәткеһен, «Туған (башҡорт) тел» уҡыу предметы саралары аша балаларға белем биреү, тәрбиәләү һәм үҫтереүҙең төп методик стратегияларын билдәләй.

Программа түбәндәге норматив-хоҡуҡи документтар нигеҙендә әҙерләнгән:

- Рәсәй Федерацияһы Конституцияһы;

- 2012 йылдың 29 декабрендә ҡабул ителгән Федераль закон «Рәсәй Федерацияһы мәғариф тураһында»ғы №273-ФЗ (үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр менән);

- 1991 йылдың 25 октябрендә ҡабул ителгән 1807-1 һанлы-«Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында»ғы Рәсәй Федерацияһы Законы (үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр менән);

- Башланғыс дөйөм белем биреүҙең федераль дәүләт белем биреү стандарты (Рәсәй Федерацияһы Мәғариф министрлығының 2021 йылдың 31 майындағы 286-сы бойороғо менән раҫланған);

- Башланғыс дөйөм белем биреүҙең яҡынса төп белем биреү программаһы (дөйөм белем биреү буйынса федераль уҡыу-методик берекмә ҡарары, 2022 йылдың 18 мартындағы 1/22-се протокол менән раҫланған);

«Тәрбиә биреүҙең яҡынса программаһы (дөйөм белем биреү буйынса федераль уҡыу-методик берекмә ҡарары, 2022 йылдың 23 июнендәге 3/22-се протокол);

- 2019 йылдың 1 октябрендә Рәсәй Федерацияһы Мәғариф министрлығы коллегияһы ултырышында раҫланған Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының туған телдәрен уҡытыу концепцияһы;

- Республика Башлығының 2020 йылдың 30 декабрендәге 613-сө Указы менән раҫланған Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен һәм Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының туған телдәрен уҡытыу концепцияһы, Башҡортостан Республикаһы Башлығының 2020 йылдың 30 декабрендәге Указы менән раҫланған.

Программаның нигеҙендә федераль дәүләт белем биреү стандарты методологияһы булып торған системалы-эшмәкәрлекле ҡараш ята. Программа яҡынса тәрбиә биреү программаһында билдәләнгән маҡсатлы йүнәлештәргә нигеҙләнә һәм «Туған (башҡорт) теле» фәне буйынса эш программаларын төҙөү өсөн йүнәлеш булып хеҙмәт итә ала. Программа уҡыу предметы буйынса эш программаһын төҙөүҙә туған (башҡорт) тел уҡытыусыһына методик ярҙам күрһәтеү маҡсатынан әҙерләнгән.

Программа уҡытыусыға:

1) туған (башҡорт) телде уҡытыу процесында башланғыс дөйөм белем биреүҙең федераль дәүләт белем биреү стандартында билдәләнгән шәхси, метапредмет һәм предмет һөҙөмтәләренә өлгәшеүҙең заманса алымдарын тормошҡа ашырырға;

2) уҡытыуҙың планлаштырылған һөҙөмтәләрен һәм «Туған (башҡорт) тел» дәресенең йөкмәткеһен уҡытыу йылдары буйынса билдәләргә;

3) Башҡортостан Республикаһы дөйөм белем биреү ойошмаларының уҡытыу башҡорт телендә алып барылған белем биреү ойошмаларының 1 - 4-се кластары өсөн тәҡдим ителгән айырым бүлек/темаларҙың уҡыу материалын үҙләштереү өсөн тәҡдим ителгән төп төрҙәрен, уҡыу ваҡытын тәғәйен класс үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, календарь- тематик планлаштырыу әҙерләргә мөмкинлек бирәсәк.

Программаның йөкмәткеһе башланғыс дөйөм белем биреүҙең башланғыс белем биреү программаһын үҙләштереү һөҙөмтәләренә өлгәшеүҙе тәьмин итә. Программа «Туған (башҡорт) теле һәм туған телдә әҙәби уҡыу» предмет өлкәһенә ингән туған(башҡорт) теле курсын өйрәнеүгә йүнәлтелгән. «Туған (башҡорт) теле һәм туған телдә әҙәби уҡыу» предмет өлкәһе сиктәрендә туған (башҡорт) тел курсының маҡсаттары үҙ йөкмәткеһе буйынса үҙенсәлекле, ул Башҡортостан Республикаһында һәм Рәсәй Федерацияһының башҡа төбәктәрендә башҡорт теленең таралыу, өйрәнелеү үҙенсәлектәре менән тығыҙ бәйле.

Программа башҡорт телен белгән уҡыусылар өсөн әҙерләнгән. Программаның йөкмәткеһе дидактикалағы системалы-эшмәкәрлекле ҡарашҡа нигеҙләнеп төҙөлгән һәм башланғыс дөйөм белем биреү программаһын үҙләштереү һөҙөмтәләренә ирешеүгә йүнәлтелгән. Уҡыу предметының йөкмәткеһе дәрестән тыш эшмәкәрлектә лә тормошҡа ашырылыуы мөмкин: конкурстар, предмет аҙналары, экскурсиялар, викториналар, тематик дөйөм мәктәп саралары һәм башҡалар.

## «Туған (башҡорт) теле» предметына дөйөм характеристика

Башҡорт теле төрки телдәрҙең ҡыпсаҡ төркөмөнә ҡарай, башҡорт халҡының туған теле булып тора. Рус теле менән бер рәттән, башҡорт теле Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле статусына эйә, йәмғиәт тормошоноң төрлө өлкәләрендә телдән һәм яҙма аралашыу сараһы булараҡ ҡулланыла.

Туған телдә уҡытылған дөйөм белем биреү ойошмаларында башҡорт теле уҡыу предметы ғына түгел, ә уҡытыу ошо телдә ойошторолған туған тел дә булыуы әһәмиәтле. «Туған (башҡорт) тел» дәресен өйрәнеү гуманитар циклдың башҡа фәндәре менән

предмет-ара бәйләнештәрҙе күҙ уңында тота, тәү сиратта «Туған (башҡорт) телдә әҙәби уҡыу» предметы менән тығыҙ бәйле ойошторола, сөнки ике предмет та уҡыусыларҙың телмәр эшмәкәрлеген үҫтереүгә йүнәлтелгән.

«Туған (башҡорт) теле» курсы белем алыусыларҙың туған телде өйрәнеүгә ихтыяжын милли мәҙәниәтте танып белеү һәм уның аша үҙ-үҙеңде байытыу, үҫтереү, тормошта урыныңды табыу ысулы булараҡ ҡәнәғәтләндереүгә йүнәлтелгән. «Туған (башҡорт) теле» уҡыу предметы башҡа туған телдәрҙе (башҡорт теленән башҡа) өйрәнеүсе уҡыусыларҙың хоҡуғын сикләмәй. Шуға күрә был дисциплинаны өйрәнеүгә бүленгән уҡыу ваҡыты башҡорт теле курсын дәүләт теле булараҡ тәрән өйрәнеү өсөн ваҡыт булараҡ ҡарала алмай. «Туған (башҡорт) теле» курсы йөкмәткеһендә телдең эске система ҡоролошона, шулай уҡ телдең тышҡы яғында тел системаһын тормошҡа ашырыу мәсьәләләренә: башҡорт теленең цивилизация һәм мәҙәниәт, дәүләт һәм йәмғиәт менән күп төрлө бәйләнештәренә ҡағылышлы мәғлүмәттәрҙе өйрәнеүгә ҡағыла. Программа башҡорт теле йәшәйешенең социомәҙәни контексын сағылдыра: атап әйткәндә, ул тел аспекттарының туранан-тура мәҙәни-тарихи шарттарға бәйле булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала.

Башҡорт телен өйрәнеүҙең башланғыс этабы булып башҡорт теле грамотаһына өйрәтеү тора. Башлап уҡырға өйрәтеү хәреф, ижек, һүҙ һәм һөйләмдәр яҙыу күнекмәләренә өйрәтеү менән бәйле алып барыла. Башҡорт грамотаһына өйрәтеүҙең мөһим үҙенсәлеге булып был курстың рус грамотаһына өйрәтеү менән тығыҙ бәйләнештә алып барылыуы тора. Бындай ҡараш башҡорт алфавиты аша өйрәнелгән өндәрҙе рус алфавиты өндәре һәм хәрефтәренә таянып өйрәнергә, шулай уҡ тел күренештәрен, рус һәм башҡорт телдәре закондарын һәм ҡағиҙәләрен аңлы, сифатлы сағыштырып үҙләштерергә мөмкинлек бирә.

Башҡорт теленең системалы курсы башланғыс мәктәптә универсаль уҡыу күнекмәләрен формалаштырыуҙа нигеҙ булып торған тел төшөнсәләре, ҡағиҙәләре, мәғлүмәттәр йыйылмаһы булараҡ тәҡдим ителгән. Был курс предмет буйынса белем алырға һәм уҡыусыларҙың танып белеү, регулятив , коммуникатив һәләттәрен үҫтерергә ярҙам итә.

Программаның уҡыу материалын һайлағанда грамотаға һәм башҡорт теленә өйрәтеүҙең, уны предмет булараҡ уҡытыуҙың, психолингвистик үҙенсәлектәре: башҡорт теленең фонетик, график һәм ижек системаһы үҙенсәлектәре иҫәпкә алынды. Мәҫәлән, авторҙар Программаның йөкмәткеһен билдәләгәндә башҡорт теленең мөһим фонетик законы – тәү башлап уҡырға һәм яҙырға өйрәтеү нигеҙендә ятҡан, башҡорт телендә сингармонизм күренешенә ҡараған, аңҡау гармонияһы законы иғтибарға алынған; шулай

уҡ программаның йөкмәткеһен билдәләгәндә һуҙынҡы өндәрҙе һәм уларҙың тамғалары-хәрефтәрҙе төп башҡорт һүҙҙәре аша өйрәнеү тәртибе билдәләнгән һ.б.

## Туған (башҡорт) теле» уҡыу предметын өйрәнеүҙең маҡсаты һәм бурыстары

**«Туған (башҡорт) теле» уҡыу предметын өйрәнеүҙең маҡсаты** - уҡыусыларҙа телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен формалаштырыу, туған телдә аралашыу оҫталығын һәм телмәр мәҙәниәтен үҫтереү, башҡорт теленең спецификаһы, тел тураһында фән бүлектәренә ярашлы төп тел берәмектәре тураһында белемде киңәйтеү; полимәҙәни йәмғиәттә Рәсәй гражданинын формалаштырыу.

**«Туған (башҡорт) теле» уҡыу предметын өйрәнеү бурыстары:**

- кесе мәктәп йәшендәге уҡыусыларҙа башҡорт теленең структураһына ярашлы тел белеме өлкәһендә башланғыс төшөнсәләрҙе (лексика, фонетика, графика, орфоэпия, морфемика (һүҙ составы), морфология һәм синтаксис) формалаштырыу;

- һөйләү һәм яҙма телмәр мәҙәниәте күнекмәләрен камиллаштырыу, дөрөҫ яҙыу һәм уҡыу оҫталығын һәм күнекмәләрен формалаштырыу;

- телмәр үҫешенә, әүҙем аралашыуға, фекерләүгә булышлыҡ итеүсе тел сараларын һайлай белеү оҫталыҡтарын камиллаштырыу, шарттар тыуҙырыу; ижадҡа ҡарата йүнәлеш биреү, ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу һәм ижади эшмәкәрлек һәләтен үҫтереү,

- туған телгә ҡарата ыңғай, эмоциональ һәм һаҡсыл ҡараш, уны һаҡлауға һәм яҡлауға ынтылыш, өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү; туған телдә таҙа һәм дөрөҫ һөйләшеү.

## «Туған (башҡорт) теле» уҡыу предметы өлгө программаһының төп йөкмәтке йүнәлештәре

«Туған (башҡорт) тел» курсының материалы Программала түбәндәге йөкмәткеле йүнәлештәре буйынса бирелгән:

- «Тел системаһы»: фонетика, графика, һүҙ составы, лексика, грамматика (морфология һәм синтаксис);

- «Орфография һәм пунктуация» - орфограммаларҙы тикшереү алымдарын үҙләштереү, орфография грамоталылығын һәм пунктуация ҡағиҙәләрен ғәмәли ҡуллана белеү оҫталығын формалаштырыу;

- «Телмәр үҫтереү» – диалог һәм монологик телмәр формаларын үҙләштереү, иншалар яҙыу, башҡорт мәҡәлдәрен һәм әйтемдәрен ҡулланыу.

**Уҡыу планында «Туған (башҡорт) теле» уҡыу предметының урыны**

Башланғыс дөйөм белем биреү федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы «Туған (башҡорт) теле» уҡыу предметы «Туған (башҡорт) теле һәм туған телдә әҙәби уҡыу» предмет өлкәһенә ҡарай һәм мотлаҡ өйрәнелергә тейешле уҡыу предметы булып иҫәпләнә. Башҡорт телендә уҡытылған мәктәптәрҙә «Туған (башҡорт) теле» предметын өйрәнеүгә башланғыс дөйөм белем биреүҙең бөтә кластарында аҙнаһына 2 сәғәт ҡаралған: йылына 98 сәғәт – 1-се класта (шуның 64 сәғәте - грамотаға өйрәтеүгә, 16 уҡыу аҙнаһы); 34 сәғәт - системалы курсҡа, 17 уҡыу аҙнаһы) һәм йылына 68 сәғәт менән 2, 3, 4 –се кластарҙа (34 уҡыу аҙнаһы) тәҡдим ителә. Дүрт йылға иҫәпләнгән дәрестәрҙең дөйөм һаны яҡынса 302 сәғәт тәшкил итә.

Белем биреү ойошмаһы уҡыу планының белем биреү мөнәсәбәттәрендә ҡатнашыусылар формалаштырған сәғәттәр һаны иҫәбенә предметты өйрәнеүгә бирелгән сәғәттәр һанын арттырырға хоҡуҡлы.

## «ТУҒАН (БАШҠОРТ) ТЕЛЕ» УҠЫУ ПРЕДМЕТЫ ЙӨКМӘТКЕҺЕ

**Телмәр эшмәкәрлеге төрҙәре**

*(1 - 4-се кластар өсөн дөйөм)*

**Тыңлап аңлау.** Һөйләүсене тыңлау. Ишеткәнде тыңлау һәм аңлау, төшөнөү. Тыңлағандан төп фекерҙе айырыпала белеү.

**Һөйләү.** Аралашыу сараларын, алымдарын (диалог, монолог, дискуссия) һайлау. Тиҫтерҙәр менән аралашыу (диалог), диалогты дауам итә белеү.

**Аралашыу мәҙәниәте.** Йәштәштәре, өлкәндәр менән, ситуацияны, , урынды иҫәпкә алып аралаша белеү.

**Уҡыу**. График өн моделе буйынса һүҙҙәр уҡыу. Һөйләмдәрҙе тотош һүҙҙәр менән уҡып сығыу. Тексты уҡыу. Дөрөҫ уҡыу. Аңлы уҡыу. Йүгерек уҡыу. Тасуири уҡыу. Уҡый белеү - мәғлүмәт эҙләүҙең универсаль алымы. Уҡыған мәғлүмәттең мәғәнәһен төшөнөү, мәғлүмәтте эшкәртеү, дөйөмләштереү. Уҡығандың йөкмәткеһен анализлау һәм уның баһалау.

**Яҙыу.** Хәрефтәрҙе яҙыу, каллиграфик нормалар буйынса дөрөҫ тоташтырыу; һүҙҙәрҙе һәм һөйләмдәрҙекүсереп яҙыу, ишетеп яҙыу, һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе, тексты, мәғлүмәтте яҙма теркәү, бирелгән өлгө буйынса ҙур булмаған текстар төҙөү (ҡотлауҙар, реклама тексы, әкиәттәр, хикәйәләр).

### 1-се класс

### Грамотаға өйрәтеү

**Телмәр үҫтереү.** Телмәр (һөйләү/яҙыу). Аралашыу (әңгәмә, диалог). Объекттарҙы, тәбиғәт күренештәрен күҙәтеү һәм күргәндәрҙе туған телдә һөйләү. Телмәр үҫтереү (иллюстрациялар, сюжетлы һүрәттәр). Уҡытыусы башҡарыуында ҙур булмаған текстар тыңлау. Һорауҙарға яуаптар. Телмәр үҫтереү. «Әлифбала» хайуандар донъяһы», «Бесәй сәйәхәт итә», «Умартасы. Олатайҙар шөғөлө», «Аҡландағы бал ҡорттары» һ.б. Халыҡ ижадының бәләкәй жанрҙары (һамаҡтар, әйтештәр һ.б.): «Бесәй, ҡайҙа бараһың?», «Хайуандар донъяһы» һ.б.

**Һүҙ һәм һөйләм.** Предметтың атамаһы булараҡ һүҙ , предметтың билдәһе булараҡ, предметтың эш-хәрәкәте (танышыу маҡсатында, терминдарһыҙ). Һүҙҙәрҙе һәм һөйләмдәрҙе айыра белеү. Һөйләмдең мәғәнәһе. Һүҙбәйләнеш (танышыу маҡсатында). Һөйләмдең график схемаһы. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре (һәм, менән; ғына-генә, ҡына-кенә). Һүҙҙе һөйләмгә ҡуйыу. Бирелгән һүҙҙәрҙән һөйләмдәр төҙөү.

**Телмәр үҫтереү.** Дәреслектәге һүрәттәр; «Йәйге уйындар», «Мин - уҡыусы!», «Минең ғаиләм», «Әсәйем эштә булғанда», «Балаларҙың йәйге уйындары» һәм башҡалар.

**Фонетика.** Телмәр өндәре. Һүҙ һәм өн. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр.Ҡалын [а],[о],[у],[ы]; нәҙек [ә],[ө],[ү],[и],[э](е) һуҙынҡы өндәр. Һүҙ өндәре. Һүҙҙең график өн моделе. Ижек. Һүҙ баҫымы. Баҫымлы ижек. Баҫымлы һуҙынҡы өн.

**Графика.** Өндәрҙе хәреф менән билдәләү.

Әә-Аа, Өө-Оо хәрефтәре. Һүҙҙәрҙе иғтибарҙы һуҙынҡы өнгә йүнәлтеп уҡыу. Телмәр үҫтереү. Сюжетлы картиналар, «Олатайыма бүләк», «Әтәс - ихатабыҙ хужаһы», «Олатайым янында умарталыҡтағы мажаралар».

Үү-Уу, Ээ (е), ы, Ии хәрефтәре. Һүҙ структураһының һәм һүҙ мәғәнәһенең бер-береһе менән бәйлелеге. Телмәр үҫтереү. «Әтәс», «Урманды һаҡлағыҙ!», «Үҫкәс, умартасы булырмын» тигән сюжетлы картиналар өҫтөндә эш.

Мм, Нн, Рр, Лл хәрефтәре. Телмәр үҫтереү. «Минең һеңлем», «Мәскәү - Рәсәйҙең баш ҡалаһы», «Музыка ҡоралдары» тигән сюжетлы картиналар.

Йй хәрефе. Дифторгылар; [йә],[йө],[йо],[йү],[йы], шулай уҡ [әй],[өй],[ой],[уй],[ый] менән һүҙҙәрҙе өйрәнеү. Яя , Ее, Ее, Юю хәрефтәре. Телмәр үҫтереү. «Май айы», «матур йәй», «Йәйләүҙә» һымаҡ сюжетлы картиналар менән эш.

*Ғғ-Ҡҡ* хәрефтәре. Рус теле дәрестәрендә танышҡан Гг-Кк хәрефтәрен ҡабатлау. Һөйләмдәрҙе күсереп яҙыу ҡағиҙәләре.Телмәр үҫтереү «Ҡунаҡ килә», «Балалар өсөн хәрәкәт уйындары» («Гөрөлдәк»), «Минең көсөгөм – Йомшаҡай» тигән сюжетлы картиналар менән эш.

*Дд-Тт* хәрефтәре. Һөйләмдәрҙе күсереп яҙыу ҡағиҙәләре. Телмәр үҫтереү. «Дуҫлыҡ монументы», «Беҙ бәхетле балалары», «Төлкө менән торна» сюжетлы картиналары менән эш.

*Һһ-Хх* хәрефтәре. Тексты күсереп яҙыу. Телмәр үҫтереү. «Һабантуй» сюжетлы картинаһы, В. А. Осеевтың «Нимә еңелерәк?» хикәйәһе менән эш.

Өн. *Бб-Пп, Вв-Фф* хәрефтәре. Өйрәнелгән хәрефтәрҙе нығытыу. Һүҙ структураһының һәм һүҙ мәғәнәһенең бер-береһе менән бәйлелеге. Телмәр үҫтереү. «Әсәйгә (атайға) ярҙам итәм», «Беҙҙең ихатала», «Өфө - Башҡортостандың баш ҡалаһы» сюжетлы картиналары.

Шш-Жж, Чч-Щщ, Хх, Цц хәрефтәре. Ҡаты айырыу билдәһе (ъ), йомшаҡ айырыу билдәһе (ь). Телмәр үҫтереү. «Мин тәбиғәтте яратам» тигән сюжетлы картина һәм С. Михалковтың «Ишәк һәм ҡондоҙ» әкиәте менән эш.

Башҡорт алфавиты (42 хәреф). Алфавитты ғәмәлдә ҡулланыу.

**Уҡыу.** Һүҙҙе һуҙынҡы өнгә иғтибар биреп уҡыу. Ижектәргә бүлеп талғын уҡыу. Яйлап һүҙҙе тотош уҡыуға күсеү. Интонация һәм паузалар менән уҡыу. Талғын уҡығанда һөйләмдәрҙең мәғәнәһентөшөнөү. Хикәйә, әкиәт, шиғырҙарҙы тасуири һөйләүгә өйрәтеүҙең башланғыс этабы.

**Яҙыу.** Дәфтәр битендә горизонталь, ҡыя һыҙыҡтар эшләргә күнегеү. Дәфтәрҙәрҙәге эш һыҙыҡтары. Баҫма һәм яҙыу юлдарын һыҙыу. Гигиена нормаларын үтәп, хәрефтәр, ижектәр, һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һүҙҙәр йыйылмаһын, һөйләмдәрҙе һәм текстарҙы күсереп яҙыу. Диктант яҙыу (өйрәтеүсе диктант). Һүҙҙәр араһында буш урын. Һүҙҙе юлдан-юлға күсереү. Ижектәрҙе, һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе (тәүҙә өс һүҙҙән) күсереп яҙыу.

**Орфография һәм пунктуация.** Һүҙҙәрҙәге хәрефтәрҙең дөрөҫ тоташтырылыуы, һүҙҙәрҙе айырым яҙыу. Һөйләм башындағы баш хәреф. Һүҙҙе юлдан-юлға күсереү. Һөйләм аҙағында тыныш билдәләре (нөктә, һорау).

**Системалы курс**

**Тел тураһында дөйөм мәғлүмәттәр.** Телмәр һәм аралашыу. Тел - аралашыу сараһы. Телмәр үҫтереү. Дәреслектәге иллюстрациялар. Һорауҙарға яуаптар.

**Фонетика.** Графика. Ҡабатлау: алфавит, хәреф атамалары, алфавиттағы хәрефтәр тәртибе, өн һәм хәреф; һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Нәҙек һәм ҡалын һуҙынҡылар. Башҡорт һәм рус телдәрендәге тартынҡыларҙың яраҡлашыуы (сағыштырыу). Өндәр таблицаһы.

**Синтаксис.** Лексика. Тел берәмеге булараҡ һөйләм. Һөйләмдә ярҙамсы һүҙ төркөмдәре. Һөйләмдә һүҙҙәр бәйләнешен мәғәнәүи һорауҙар ярҙамында асыҡлау. Һүҙҙе һөйләмгә ҡуйыу. Һөйләмдең график схемаһы. Һүҙ - тел берәмеге. Предметтың атамаһы, предметтың билдәһе булараҡ һүҙ, предметтың хәрәкәте (ҡабатлау). Ярҙамсы һүҙҙәрҙе (һәм, менән; ғына-ҡына, генә-кенә) телдән һәм яҙма телмәрҙә ҡулланыу.

**Орфоэпия**. Һүҙҙәрҙә өндәрҙең һәм өн ҡушылмаларының әйтелеше. Башҡорт һүҙҙәрендә баҫым үҙенсәлеге.

Тик ҡалын [а],[о],[у],[ы] йәки тик нәҙек[а],[о],[у],[ы]; һуҙынҡыларҙан ғына торған һүҙҙәр (сингармонизм законы, терминһыҙ, танышыу маҡсатында).

**Орфография һәм пунктуация.** Һүҙҙәрҙең яҙылышы: һүҙҙә хәрефтәрҙең дөрөҫ тоташтырылыуы, һүҙҙәрҙе айырым яҙыу.Һөйләм башындағы баш хәреф. Исемемдең һәм фамилиямдың баш хәрефе. График модель. һыҙмалар: Һүҙҙәр араһындағы аралыҡ, һүҙҙе юлдан юлға күсереү билдәһе. Һүҙҙе юлдан-юлға күсереү. Һөйләм аҙағында тыныш билдәләре (нөктә, һорау билдәһе).

**Телмәр үҫтереү.** Уҡытыусы, тиҫтерҙәр менән аралашыу. Мөрәжәғәткә яуап биреү. Сюжетлы картиналар, һүрәттәр,дәреслек материалдары буйынса һөйләмдәр, ҙур булмаған

текстар төҙөү. Дәреслектә бирелгән текстар менән эшләү. Объекттарҙы, тәбиғәт күренештәрен күҙәтеү һәм күргәнде туған телдә һөйләү.

**Телмәр эшмәкәрлеге төрҙәре**

*Тыңлап аңлау.* Телмәр өндәрен дөрөҫ итеп әйтә белеү. Һүҙҙәрҙең өн моделен төҙөү. Һөйләүсене (уҡытыусыны, класташтарҙы) тыңлап аңлау. Уҡытыусы уҡыған тексты тыңлап аңлау. Һүрәттәргә, дәреслектәге биремдәргә, һүрәттәргә нигеҙләнеп телдән һөйләмдәр төҙөү. Шиғыр ятлау, әкиәттәр һөйләү һ.б.

*Һөйләү.* Һүҙ тураһында башланғыс төшөнсә. Предмет һәм һүҙ. Предметтарҙың, тирә-яҡтағы ысынбарлыҡ объекттарының атамаһы. Туған телдәге дәреслектең иллюстрациялары, һүрәттәре буйынса хикәйә төҙөү. Аралашыу сараларын, алымдарын (диалог, дискуссия) һайлау. Йәштәштәр менән аралашыу (диалог), туған телдә диалог алып барыу.

*Уҡыу.* Ижектәр, һүҙҙәр, һөйләмдәр, текстар уҡыу. Биремдең шартын,эште башҡарыу алгоритмын аңлы рәүештә уҡыу. Дәреслектәге график өн моделе буйынса һүҙҙәрҙе уҡыу. Һөйләмде дөрөҫ интонация менән аңлы уҡыу. Тексты мәғәнәһенә төшөнөп уҡыу. Эҙләп тапҡан мәғлүмәтте эшкәртеү, төшөнөү, дөйөмләштереү.

*Яҙыу.* Хәрефтәрҙе каллиграфик нормалар буйынса дөрөҫ тоташтырыуҙы автоматлаштырыу. Һүҙҙәрҙе һәм һөйләмдәрҙе күсереп яҙыу, яҙылған һүҙҙәрҙе һәм һөйләмдәрҙе тикшереү. Һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе,ҙур булмаған тексты ишетеп (диктант) яҙыу.

**Практик эш.** Алфавитты тормошта файҙаланыу (класташтарының, бәләкәй төркөмдөң фамилиялар исемлеген төҙөү) һ.б.

Проект эше. «Хәрефле ялан» күргәҙмәһе. Кесе төркөмдәрҙә йәки парҙар менән эштәрҙе башҡарыу.

**2-се класс**

**Тел тураһында дөйөм мәғлүмәттәр.** Телмәр һәм аралашыу. Тел - төп аралашыу сараһы. Диалог. Аралашыу этикеты.

**Фонетика һәм графика.** Ҡабатлау: алфавит, өн/хәреф. Өндәрҙең мәғәнә айырмалығы функцияһы. Һүҙ хәрефен алмаштырыу һәм һүҙҙең мәғәнәһен күҙәтеү. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен һәм хәрефтәрен айыра белеү (ҡ, ғ, ҙ, ҫ һ.б.). Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Һүҙ уртаһында һәм һүҙ аҙағында нәҙек һуҙынҡылар: [ә], [ө], [ү], [е] ҡалын һуҙынҡылар: [а], [о], [у], [ы]. Башҡорт телендәге специфик тел күренеше: һүҙҙәрҙә тартынҡы өндәрҙең сиратлашыуы [ғ] -[ҡ], [г]- [к],[б]- [п].Һүҙ башында һәм һүҙ уртаһында дифтонгылар [йә],[йө],[йү],[йы], [йо.] Һүҙ башында ике өн белдереүсе е, ю, я хәрефтәре.

Телмәр үҫтереү. «Хәрефтәр донъяһы илендә», «Минең яраҡкан уйындарым», «Мәктәп байрамдары» һүрәттәре.

**Орфоэпия.** Башҡорт телендә баҫым үҙенсәлектәре: ҡағиҙә булараҡ, баҫым һуңғы ижеккә төшә. Һүҙгә ялғау ҡушылғанда баҫымдың һуңғы ижеккә күсеүе.

**Лексика.** Һүҙ - тел берәмеге. Текст йәки аңлатмалы һүҙлек буйынса һүҙҙең мәғәнәһен билдәләү. Телмәрҙә бер төрлө һәм ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙең ҡулланылыуын күҙәтеү.

**Һүҙ составы (морфемика).** Һүҙҙең тамыры – мәғәнәүи төп өлөш. Тамырҙаш һүҙҙәр. Тамырҙаш һүҙҙәрҙең билдәләре. Һүҙҙәрҙә тамыр һәм ялғау (ябай осраҡтары). Һөйләмдә һүҙҙәрҙе бәйләүҙә ялғауҙың роле.

**Морфология.** Предметтың атамаһын аңлатҡан һүҙҙәр. «Кем?» «нимә?» һорауҙары, уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. Предметтың билдәһен аңлатҡан һүҙҙәр. «Ниндәй?» һорауы, уны телмәрҙә ҡулланыу. Предметтың хәрәкәтен аңлатҡан һүҙҙәр. «Ни эшләй?» һорауы, уны телмәрҙә ҡулланыу. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре (дә-да, лә-ла, тә-та һ.б.).

**Синтаксис.** Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. Эш-хәрәкәтте белдергән һүҙ. Уны, ҡағиҙә булараҡ, һөйләм аҙағында ҡулланыу.

**Орфография һәм пунктуация.** Һүҙ башында ө-о, ү-у, э хәрефтәре менән, һүҙ уртаһында е хәрефе менән, һүҙ башында э хәрефе менән, һүҙ уртаһында е ([э]өнө) хәрефе менән, һүҙ уртаһында һәм аҙағында й (дифтонгылыр [йә],[йө],[йү],[йы], [йо] [йе]) хәрефе менән,һүҙ башында Вв ([ү] -[у] өндәре), һөйләм башында баш хәреф,яңғыҙлыҡ исемдәрҙә(кеше исемдәре,хайуан ҡушаматары)баш хәрефтең дөрөҫ яҙылышы. Һүҙҙәрҙе юлдан-юлға күсереү. Һөйләм аҙағында тыныш билдәләре. Үҙең төҙөгән һәм тәкдим ителгән текстарҙы тикшергәндә контроль һәм үҙконтроль.

**Телмәр үҫтереү.** Сюжетлы картиналар, дәреслек материалдары буйынса һөйләмдәр, ҙур булмаған текстар төҙөү. Объекттарҙы, тәбиғәт күренештәрен күҙәтеү һәм күргәндәрҙе һөйләү. Һорау төҙөй һәм уны кәрәкле яуап алырлыҡ итеп конкретлаштырып,төҙәтеп,ҡабатлап,аныҡлап бирә белеү.

**Телмәр эшмәкәрлеге.** Яҙма һәм һөйләү телмәре тураһында төшөнсә; һөйләмдәр төҙөү, уның график схемаһы һ.б.

*Тыңлап аңлау***.** Тыңларға һәм ишеткәнде аңларға. Ишеткәндән кәрәкле мәғлүмәт алырға һәм төп фекерҙе айырып күрһәтә белергә.

*Уҡыу.* Дәреслектең тексын, уның биремдәрен уҡыу. Һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе, текстарҙы уҡыу. Күнегеүҙең биремен, шарттарын уҡыу һәм башҡарыу планын төҙөү. Фекерҙе тасуири итеп еткереү өсөн төплө аңлау.Уның тасуирлауы өсөн әйтелгәндәрҙе аңлау. Мәғлүмәт йәки аңлатмаларҙы тәүсығанаҡтарҙан эҙләү (уҡыу).

*Һөйләшеү.* Аралашыу формаларын булдырыу (диалог, монолог, дискуссия). Коллективта аралаша белеү һәләттәрен камиллаштырыу.

Телмәр мәҙәниәте. Бер-береңә мөрәжәғәт итеү, аралашыу үҙенсәлектәре: уҡытыусы, класташтар, туғандар, таныш булмағандар менән аралашыу. Аралашыу урыны. Аралашыу ваҡыты. Төрлө тормош ситуацияларында аралашыу. Телмәрҙең йөкмәткеһе һәм формалары.

Телмәр ситуациялары: мөрәжәғәт, һорау, саҡырыу, үтенес, бәхәс, диалогтар һәм башҡалар.

Телмәр саралары: баҫым, тон, тауыш көсө, тауыш тембры, пауза, мимика, ишара. Әңгәмәсе менән уңышлы диалог алып барыу өсөн шарттар булдырыу. Аралашыусының фекерен тыңлай, ипле итеп үҙ фекереңде әйтә белеү, мәҙәни диалог ҡағиҙәләрен белеү. Телмәрҙең орфоэпик формалары.

Яҙыу. Һәр хәрефтең каллиграфик яҙыу нормалары, хәрефтең дөрөҫ тоташтырылыуы. Бирелгән текстан һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе дөрөҫ яҙып алыу. Һүҙҙәрҙе,һөйләмдәрҙе диктант итеп яҙыу. Ишеткән текстан кәрәкле мәғлүмәтте яҙып алыу. Бәләкәй текстар: хат, ҡотлау, әкиәттәр, мәҡәлдәр һәм башҡалар.

Һүҙҙең номиналь функцияһы. Телмәрҙә уның әһәмиәте. Предметтың эш-хәрәкәтен аңлатҡан һүҙҙәр. Һүҙбәйләнештәр. Уларҙың график билдәләнеше. Был һүҙҙәр предметтың билдәләрен аңлата. Һүҙбәйләнештәр. Уларҙың график билдәләнеше.

**Проект эше.** Тәүге ҡағыҙ китап. Уның барлыҡҡа килеү тарихы. Ата-бабаларымдың шәжәрәһе. Минең яратҡан йорт хайуандарым. Халыҡ ижады ынйылары.

### 3-сө класс

**Тел тураһында дөйөм мәғлүмәттәр.** Рус теле - Рәсәй Федерацияһының дәүләт теле. Туған (башҡорт) тел - Башҡортостан Республикаһының икенсе дәүләт теле. Тел - мәғлүмәтте еткереү сараһы. Туған телдә аралашыу. Диалог. Аралашыу этикеты.

**Фонетика һәм графика.** Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар. Башҡорт телендә үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә тауыш һәм шау ҡатнашыуы, йомшаҡлыҡ һәм ҡатылыҡ буйынса пар тартынҡылар. Һүҙлектәр, белешмәләр һ.б. менән эшләгәндә алфавит ҡулланыу.

**Орфоэпия.** Башҡорт һүҙҙәрендә өндәрҙең һәм өн ҡушылмаларының әйтелешендә әйтелеш нормалары. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле нормаларына ярашлы һүҙҙәрҙә баҫым (ҡабатлау). Һүҙ башында *в* хәрефен уҡыу үҙенсәлектәре: *ваҡыт – [уаҡыт], вәсилә – [үәсилә]*. Практик мәсьәләләрҙе хәл итер өсөн орфоэпик һүҙлекте ҡулланыу.

Телмәр үҫтереү. Дәреслектәге иллюстрациялар.

**Лексика.** Һүҙҙең лексик мәғәнәһе (ҡабатлау). Һүҙҙең тура һәм күсмә мәғәнәһе (танышыу); синонимдар, антонимдар (ҡабатлау).

**Һүҙ составы (морфемика).** Тамыр – һүҙҙең төп мәғәнәүи өлөшө.Тамырҙаш һүҙҙәр, тамырҙаш һүҙҙәрҙең билдәләре, һүҙҙә тамырҙы билдәләү. Һүҙҙең үҙгәрә өлөшө - ялғау (ҡабатлау).

Тамырҙаш һүҙҙәр һәм уларҙың формалары. Тамыр. Ялғау- һүҙҙең состав өлөшө. Яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙар.

**Морфология.** Һүҙ төркөмдәре. Исем: дөйөм мәғәнәһе, һорауҙары, телмәрҙә ҡулланышы. Исемдәрҙең һан (берлектә һәм күплектә) менән үҙгәреше. Йәнле һәм йәнһеҙ предметтарҙы белдергән исемдәр. Уларҙың рус теленән айырмаһы. Башҡорт телендә тик кешеләр генә кем? Һорауына яуап биреүе. Исемдәрҙең эйәлек категорияһы. Исемдәрҙең эйәлек категорияһын һүҙҙәр ярҙамында сағылдырыу:1) минең, һинең, беҙҙең; 2) һүҙҙең тамырына *-ныҡы, -неке, -ноҡо, -нөкө, -дыҡы, -деке, -доҡо, -дөкө, -тыҡы, -теке, -тоҡо, -төкө, -ҙыҡы, -ҙеке, -ҙоҡо, -ҙөкө* ялғауҙары ҡушып яһала. Исемдәрҙең һүҙҙәрҙе ҡушыу һәм ҡабатлау юлы менән яһалышы. Сифат: дөйөм мәғәнәһе, һорауҙар, телмәрҙә ҡулланыу. Төрҙәре: төп: *ҡыҙыл таҫма;* 2) шартлы: *яҙғы ел.* Исемдәрҙең сифаттар менән мәғәнәүи бәйләнеше. Ҡылым. Мәғәнәһе, һорауҙары, телмәрҙә ҡулланыу. Ҡылымдың грамматик билдәләре (һаны, заты). Һөйләмдә ҡылымдың урыны ( башлыса һөйләм аҙағында килеүе). Ҡылымдың исем һүҙ төркөмө менән менән мәғәнәүи бәйләнеше.

**Синтаксис.** Һөйләм. Һөйләмдәге һүҙҙәр араһында мәғәнәүи бәйләнеш урынлаштырыу. Һөйләмдең баш киҫәктәре: эйә һәм хәбәр. Ярҙамсы һүҙҙәр. Йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәр.Һөйләмдәге тиң киҫәктәрҙе күҙәтеү.

**Орфография һәм пунктуация.** Орфографик оҫталыҡ - хата барлыҡҡа килеү ихтималлығын аңлау, орфографик бурысты хәл итеү саралары. Үҙең төҙөгән һәм әҙер текстарҙы тикшергәндә контроль һәм үҙконтроль. Һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙыуҙы аныҡлау өсөн орфография һүҙлеген ҡулланыу.

Дөрөҫ яҙылыш ҡағиҙәләре һәм улар менән файҙаланырға өйрәнеү:

- исемдәрҙә, фамилияларҙа, хайуан ҡушаматтарында, ҡала, ауылдарҙың исемендә һәм башҡа географик атамаларҙа баш хәреф (ҡабатлау);

- китаптарҙың һәм әҫәрҙәрҙең, газета,журналдарҙың атамалары; башҡорт телендә үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы; ярҙамсы һүҙҙәрҙең айырым яҙылышы *(дә-да, ҙә-ҙа, лә-ла, тә-та);*

- ике өндө аңлатҡан хәрефтәр менән һүҙҙәр *(е, е, ю, я);*

- ҡуш тартынҡылар менән һүҙҙәр;

- тамырында тик о-ө (өкө- өкөнөң, һолоноң) һ.б.)һуҙынҡылары ғына булған исемдәрҙә ялғауҙар.

Телмәр үҫтереү. Телмәр төрҙәре (һөйләү һәм яҙма телмәр). Диалог. Диалогта үҙ фекереңде иҫбатлай һәм дәлилләй белергә өйрәтеүсе телмәр саралары. Дөйөм эшмәкәрлектән һуң, һөйләшеп, дөйөм фекергә килә белеү, һығымта яһай белеү. Парлы һәм төркөмләп эш башҡарғанда үҙ ҡылыҡтарыңды контролдә тотоу. Монолог, текст төҙөү.

Телмәр эшмәкәрлеге.

Тыңлап аңлау, һөйләү. Телдән һөйләү һәм яҙма телмәр. Телдән һөйләү. Аралашыу. Тамашасылар алдында сығыш яһау. Яҙыу. Көндәлек. Бәләкәй текстар (хикәйәләр, әкиәттәр һ.б.) ижад итеү.

Уҡыу һәм яҙыу. Биремдәрҙең тексын, күнегеүҙәрҙе һәм уларҙы үтәү шарттарын уҡыу. Дәреслектәге төрлө жанрҙағы текстарҙы уҡыу. Телмәрҙе яҙма рәүештә теркәү (ҡулдан яҙҙырылған йәки мониторҙа баҫтырылған телмәр). Яҙма телмәр: изложение, инша, хат, көндәлек, СМС-хәбәрҙәр. Китап, дәреслек, журналдар, газеталар. Хикәйә, повесть, роман, әкиәт, шиғыр. Бәләкәй жанрҙар: мәҡәл, әйтемдәр, йомаҡтар. Художестволы китаптар, дәреслектәр, журналдар һәм газеталарҙың, шулай уҡ әҫәрҙәрҙең исемдәрен дөрөҫ яҙыу.

**Проект эше** (темаларҙы һайлап алыу). Башҡорт бишек йырҙары. Заманса башҡорт телендәге йәнһүрәттәр. Башҡортостан Республикаһындағы балалар өсөн журналдар. Әкиәттең тел үҙенсәлектәре (бер башҡорт балалар әкиәтен үҙ аллы һайлау).

## 4-се класс

**Тел тураһында дөйөм мәғлүмәттәр**. Рәсәй Федерацияһы, шул иҫәптән Башҡортостан Республикаһында ла, күп телдәр һәм мәҙәниәттәр төрлөлөгө. Туған (башҡорт) теле - аралашыу сараһы, рухи-әхлаҡи үҫеш сығанағы; кешенең дөйөм мәҙәнилеге күрһәткесе булараҡ дөрөҫ һөйләү һәм яҙма телмәр кимәле. Телде танып белеүҙең төрлө алымдары: күҙәтеү, анализ, мини-тикшеренеү, проект.

**Фонетика һәм графика.** Башҡорт теленең өндәр системаһы. Билдәләнгән параметрҙар буйынса һүҙ эсендә, айырым да характеристика биреү, сағыштырыу, анализлау, классификация яһау.

**Орфоэпия**. Һөйләү һәм уҡыу процесында дөрөҫ интонация. Өндәрҙе әйтеү һәм өн ҡушылмалары яһау нормалары. Һүҙҙәрҙә баҫымдың башҡорт әҙәби теле нормаларына тап килеүе. Һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтелешен асыҡлағанда һәм башҡа практик мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн башҡорт теленең орфоэпик һүҙлеген файҙаланыу.

**Лексика.** Телмәрҙә синонимдар, антонимдар, омонимдар, мәҡәлдәр, әйтемдәр ҡулланыу. Тәҡдим ителгән һөйләмдәрҙә һәм текстарҙа һүҙҙәрҙең күп мәғәнәлелеген асыҡлау. Һөйләү телмәре һәм яҙма телмәр. Һүҙҙең күп мәғәнәлелеге. Ҡабатлау: һүҙҙең күсмә мәғәнәһе, синонимдар, антонимдар, омонимдар.

**Һүҙ составы (морфемика).** Һүҙҙең үҙгәреше. Һүҙҙәрҙә тамыр, ялғауҙарҙы айырып күрһәтеү ( ҡабатлау).

**Морфология.** Һүҙ төркөмдәре. Исем. Ҡабатлау: грамматик мәғәнәһе, формаһы (һаны, заты, килештәре). Үҙләштерелгән һүҙҙәр һәм уларҙағы ялғау үҙенсәлектәре.Һүҙ төркөмө булараҡ исемде тикшереү.

Сифат. Дөйөм мәғәнәһе, һорауҙары, телмәрҙә ҡулланылыуы (ҡабатлау). Сифаттарҙың сағыштырыу дәрәжәһе. Сифаттарҙың яһалышы (ябай осраҡтары). Һүҙ төркөмө булараҡ сифатты тикшереү.

Алмаш. Дөйөм мәғәнәһе, һорауҙары, телмәрҙә ҡулланышы. Алмаштар төркөмсәләре. Текста нигеҙһеҙ ҡабатлауҙарҙы бөтөрөү өсөн зат алмаштарын файҙаланыу.

Ҡылым (ҡабатлау). Мәғәнәһе, һорауҙары, грамматик билдәләре (һаны, заты, ваҡыты), телмәрҙә ҡулланышы. Тамыр ҡылым.Ҡылымдарҙың яһалышы. Һүҙ төркөмө булараҡ сифатты тикшереү.

Рәүеш. Мәғәнәһе, һорауҙары, телмәрҙә ҡулланыу.Рәүеш төрҙәре. Рәүештәрҙең яһалышы (ябай осраҡтар). Рәүеш һәм сифат (сағыштырыу). Һөйләмдә уларҙың башҡарған функцияһы.

Һан (танышыу маҡсатында). Мәғәнәһе, һорауҙары, телмәрҙә ҡулланыу.

**Синтаксис.** Ҡабатлау: башҡорт телендә һөйләм структураһының үҙенсәлектәре; һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре. Тиң эйәләр һәм хәбәрҙәр. Һөйләмдә өндәш һүҙҙәр. Ҡабатлау: һөйләү телмәре һәм яҙма телмәр; текст, уның атамаһы; текстың мәғәнәүи өлөштәре. Һүҙҙең күп мәғәнәлелеге (синонимдар, антонимдар, омонимдар). Төп башҡорт фразелогизмдары. Инша яҙыу йәки проект эше.

**Орфография һәм пунктуация.** 1, 2, 3 – сө кластарҙа өйрәнгән дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен ҡабатлау. Орфографик оҫталыҡ хаталарҙы иҫкәртеү сараһы икәнен төшөнөү. Үҙең төҙөгән һәм тәҡдим ителгән текстарҙы тикшергәндә контроль һәм үҙконтроль (яңы орфографик материалда ҡабатлау һәм нығытыу). Һүҙ дөрөҫ яҙылышын тикшереү маҡсатында орфографик һүҙлек ҡулланыу.

Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре һәм уларҙың ҡулланышы:

- исемдәрҙә, фамилияларҙа, хайуан ҡушаматтарында, ҡала, ауыл, илдәрҙең һәм башҡа географик атамаларҙа баш хәреф (ҡабатлау);

- китаптарҙың, газета, журналдарҙың атамалары;

- башҡорт телендәге үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙың яҙылышы;

- ярҙамсы һүҙҙәрҙе айырып яҙыу (*ғынә-генә, ҡына-кенә; дә-да, ҙә-ҙа, лә-ла, тә-та*);

- ҡуш тартынҡыларҙың дөрөҫ яҙылышы;

- ике өндө аңлатҡан хәрефтәр (*е, е, ю, я*) алдында айырыу (ҡатылыҡ, йомшаҡлыҡ) билдәләре булған һүҙәр;

- тамырында тик ө-о һуҙынҡылары ғына булған исемдәрҙә ялғауҙар (ҡабатлау);

- художестволы китаптар, дәреслектәр, журналдар һәм газеталарҙың исемдәрен, шулай уҡ әҫәрҙәрҙең исемдәрен дөрөҫ яҙыу (ҡабатлау).

**Телмәр үҫтереү.** Түбән кластарҙа башланған эште ҡабатлау һәм дауам итеү: телдән һөйләү һәм яҙма аралашыу ситуациялары (хат, ҡотлау открыткаһы, реклама мәғлүмәте һ.б.); диалог, монолог; текст һәм текст темаһының уның атамаһында сағылышы.

*Уҡыу.* Өйрәнеү, танышыу маҡсаты менән уҡыу. Текстың темаһы һәм төп фекере; темаға һәм төп фекергә таянып билдәләнгән текстың атамаһы; бирелгән текстарға план төҙөү. Текста күрһәтелгән формала мәғлүмәт эҙләү. Текста булған мәғлүмәт нигеҙендә ябай һығымталар төҙөү. Текстағы мәғлүмәтте интерпретациялау һәм дөйөмләштереү.

*Яҙыу.* Яҙма ижади эш төрө булараҡ инша. Бирелгән темалар буйынса инша яҙыу (әҙерлек эшенән һуң). Текстарҙы (әҙер һәм үҙҙәре төҙөгән) теүәллек,дөрөҫлөк,йөкмәтке һәм тасуирилыҡ күҙлегенән төҙәтеү.

**Телмәр эшмәкәрлеге.** *Тыңлау, һөйләшеү.* Һөйләү телмәре һәм яҙма телмәр.

Әйтелгәнде ишетеп аңлау. Ишеткәндән кәрәкле мәғлүмәт алыу һәм төп фекерҙе айырып билдәләй белеү. Аралашыу. Аралашыу формаларын булдырыу (диалог, монолог,

дискуссия). Маҡсаттарҙы, аралашыу урындарын һәм уның кемдәр менән булыуын иҫәпкә алып аралашыу ситуацияларын булдырыу; уңышлы тел сараларын һайлау. Орфоэпик нормаларҙы, дөрөҫ интонацияны, аралашыу нормаларын иҫәпкә алып, телдән һәм монологик текст төҙөү (4-6 һөйләм); конкрет ситуацияла яҙма аралашыу өсөн телдән һәм яҙма текстар (3-5 һөйләм) яҙыу. Коллектив эсендә аралаша белеү һәләтен камиллаштырыу. Әңгәмәсенең фекерен тыңлай, ипле итеп үҙ фекерен әйтә белеү, мәҙәни кимәлдә диалог ҡора белеү ҡағиҙәләрен үҙләштереү. Телмәр ситуациялары: мөрәжәғәт, һорау, саҡырыу, үтенес, бәхәс, диалог. Телмәр саралары: баҫым, тон, тауыш көсө, тауыш тембры, пауза, мимика, ишара.

*Уҡыу*. Биремдәге текстарҙы, күнегеүҙәрҙе һәм уларҙы үтәү шарттарын аңлы рәүештә уҡыу. Уҡығанды аңлау, алған мәғлүмәтте эшкәртеү һәм уны практикала ҡулланыу.

*Яҙыу*. 70 һүҙҙән артмаған күләмле текстарҙы күсереп яҙыу; өйрәнелгән ҡағиҙәләрҙе иҫәпкә алып, 65 һүҙҙән артмаған тексты диктант итеп яҙыу.

Текстың (бирелгән) орфографик хаттарын төҙәтеп, йөкмәткеһенә өҫтәмәләр һәм төҙәтмәләр индереп, артығын һәм ҡабатлауҙарҙы алып; уңышһыҙ төҙөлгән тәҡдимдәрҙе төҙәтеп, төрлө телмәр хаталарын бөтөрөп яҙыу. Телмәрҙе яҙма рәүештә теркәү (ҡулдан яҙылған йәки мониторҙа баҫтырылған текст). Яҙма телмәр: изложение, инша, хат, көндәлек, СМС-хәбәрҙәр.

Проект эше (темалар һайлау). Башҡорт бишек йырҙары. Башҡорт телендәге заманса йәнһүрәттәр. Кешеләрҙең исемдәре. Башҡортостан Республикаһының балалар журналдары. Әкиәттең тел үҙенсәлектәре (бер башҡорт балалар әкиәтен үҙ аллы һайлау). Йомаҡтарҙа, мәҡәлдәрҙә һәм әйтемдәрҙә алмаштар.

## БАШЛАНҒЫС ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ КИМӘЛЕНДӘ «ТУҒАН (БАШҠОРТ ТЕЛЕ»

## ПРЕДМЕТЫ ПРОГРАММАҺЫН ӨЙРӘНЕҮ БАРЫШЫНДА ФОРМАЛАШТЫРЫЛЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ ПЛАНЛАШТЫРЫЛҒАН ҺӨҘӨМТӘЛӘР

### Шәхси һөҙөмтәләр

Башланғыс мәктәптә «Туған (башҡорт) теле» предметын өйрәнеү һөҙөмтәһендә тәрбиә биреү эшмәкәрлегенең төп йүнәлештәрен тормошҡа ашырғанда уҡыусы түбәндәге шәхси һөҙөмтәләргә өлгәшә

***граждандлыҡ-патриотик тәрбиә биреү:***

– Тыуған илеңә - Рәсәйгә, шулай уҡ тыуған Башҡортостаныңа һөйөү, хөрмәт тәрбиәләү;

– уҡый-яҙа белеү, үҙ аллы белем алыу һәм үҙ-үҙеңде тәрбиәләү һәләтен булдырыу;

– аралашыу ҡоралы булараҡ телдең ролен аңлау;

– мәктәпкә ыңғай мөнәсәбәт, уҡыу йортоноң матди ҡиммәттәренә һаҡсыл мөнәсәбәт;

– үҙ йортоңа, тыуған яғыңа һөйөү, класташтарыңа, уҡытыусыларыңа һәм туғандарыңа ихтирамлы мөнәсәбәт;

– балаларҙы башҡорт халҡының мәҙәни мираҫына, рухи ҡиммәттәренә ылыҡтырыу; халыҡ ижадына (әкиәттәргә, мәҡәлдәргә һәм әйтемдәргә) ҡыҙыҡһыныу уятыу; халыҡтың мәҙәниәтен, тарихын, йолаларын һаҡлау сараһы булараҡ туған телгә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү;

***рухи-әхлаҡи тәрбиә биреү:***

– үҙеңдең тормош һәм уҡыу тәжрибәһенә таянып, һәр кешенең индивидуаллеген таныу;

– үҙенең хәл-торошон һәм тойғоларын сағылдырыу өсөн, уңышлы тел сараларын ҡулланып, ҡайғы уртаҡлашыу, хөрмәт һәм изгелек белдереү;

– башҡа кешеләргә физик һәм әхлаҡи зыян килтереүгә (шул иҫәптән рөхсәт ителмәгән тел сараларын файҙаланыу менән бәйле) йүнәлтелгән тәртиптең төрлө формаларын ҡабул итмәү;

***эстетик тәрбиә биреү:***

– художестволы мәҙәниәткә ихтирам һәм ҡыҙыҡһыныу, төрлө сәнғәт төрҙәрен, үҙ халҡыныдың һәм башҡа халыҡтарҙың йолаларын һәм ижадын ҡабул итеү;

– художестволы эшмәкәрлектең төрлө төрҙәрендә, шул иҫәптән һүҙ сәнғәтендә, үҙ-үҙеңде күрһәтеүгә ынтылыу; аралашыу һәм үҙ-үҙеңде танытыу сараһы булараҡ башҡорт теленең мөһимлеген аңлау;

***физик тәрбиә биреү, һаулыҡ һәм эмоциональ именлек мәҙәниәтен булдырыу:***

– тел ғилеме менән таныштырыу процесында өҫтәмә мәғлүмәт эҙләгәндә тирә-яҡ мөхиттә сәләмәт һәм хәүефһеҙ (үҙҙәре һәм башҡа кешеләр өсөн) йәшәү рәүеше (шул иҫәптән мәғлүмәти) ҡағиҙәләрен үтәү;

– телмәр аша үҙеңде танытыуҙың уңышлы ысулдарын һайлауҙа һәм телмәр этикеты нормаларын һәм аралашыу ҡағиҙәләрен үтәүҙә сағылыш тапҡан физик һәм психик сәләмәтлеккә һаҡсыл мөнәсәбәт;

***хеҙмәт тәрбиәһе биреү:***

– кеше һәм йәмғиәт тормошонда хеҙмәт ҡиммәттәрен аңлау (шул иҫәптән художестволы әҫәрҙәрҙәге миҫалдар ярҙамында), хеҙмәт һөҙөмтәләренә һаҡсыл һәм яуаплы мөнәсәбәттә булыу, хеҙмәт эшмәкәрлегенең төрлө төрҙәрендә ҡатнашыу күнекмәләре, художестволы әҫәрҙәрҙәге миҫалдарҙы тикшереү аша төрлө һөнәрҙәргә ҡыҙыҡһыныу;

***экологик тәрбиә биреү:***

– текстар менән эшләү аша тәбиғәткә һаҡсыл мөнәсәбәт;

– уға зыян килтергән ғәмәлдәрҙе ҡабул итмәү;

***ғилми танып белеү ҡиммәттәре:***

– донъяның фәнни картинаһы тураһында тәүге күҙаллауҙар (шул иҫәптән донъяның дөйөм фәнни картинаһының бер өлөшө булараҡ тел системаһы тураһында тәүге күҙаллауҙар); танып-белеү ҡыҙыҡһыныуҙары, әүҙемлеге, инициативалылығы, ҡыҙыҡһыныусанлығы һәм үҙаллылығы, шул иҫәптән башҡорт телен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу, уны танып-белеү әүҙемлеге һәм үҙаллылығы.

## Метапредмет һөҙөмтәләре

1-4-се кластарҙа «Туған (башҡорт) тел» дәресен өйрәнеү һөҙөмтәһендә уҡыусы универсаль **танып-белеү эшмәкәрлеге** ғәмәлдәренә эйә була.

***Төп логик ғәмәлдәр:***

– төрлө тел берәмектәрен сағыштырырға, тел берәмектәрен сағыштырыу нигеҙҙәрен билдәләргә, тел берәмектәре оҡшашлығын билдәләргә;

– объекттарҙы (тел берәмектәрен) билдәле бер билдә буйынса берләштерергә; тел берәмектәрен классификациялау өсөн мөһим билдәне асыҡларға; тел берәмектәрен классификацияларға;

– тел материалында уҡытыусы тәҡдим иткән күҙәтеү алгоритмы нигеҙендә законлылыҡты һәм ҡапма-ҡаршылыҡты табыу; тел берәмектәре менән эшләгәндә эш итеү алгоритмын анализларға, тел берәмектәрен анализлағанда уҡытыу операцияларын үҙ аллы айырып күрһәтергә;

– тәҡдим ителгән алгоритм нигеҙендә уҡыу һәм практик бурысты хәл итеү өсөн мәғлүмәттең етешмәүен асыҡларға, өҫтәмә мәғлүмәткә һорау әҙерләргә;

– тел материалын күҙәтеү осраҡтарында сәбәп-тикшереү бәйләнештәрен билдәләргә, һығымталар яһарға;

***төп тикшеренеү ғәмәлдәре:***

– уҡытыусы ярҙамында маҡсат ҡуйырға, тел объектын, телмәр ситуацияһын үҙгәртеүҙе планлаштырырға;

– эште башҡарыуҙың бер нисә вариантын сағыштырыу, иң уңышлыһынын һайлап алырға (тәҡдим ителгән критерийҙар нигеҙендә); тәҡдим ителгән план буйынса ҡатмарлы лингвистик мини-тикшеренеү эшен үткәреергә, тәҡдим ителгән план буйынса проект эшен үтәргә;

– тел материалына үткәрелгән күҙәтеү һөҙөмтәләре нигеҙендә һығымталар яһарға һәм уларҙы дәлилдәр менән нығытырға (классификациялау, сағыштырыу, тикшереүҙәр);

– тәҡдим ителгән тел материалын анализлау барышында уҡытыусы ярҙамында һорауҙар төҙөргә;

– таныш йәки оҡшаш ситуацияларҙа процестарҙың, ваҡиғаларҙың нисек үҫеш алыу ихтималлығын һәм уларҙың эҙемтәләрен күҙалларға;

***мәғлүмәт менән эшләү:***

– мәғлүмәт алыу сығанаҡтарын һайларға: мәғлүмәт алыу, асыҡлау өсөн кәрәкле һүҙлек;

– бирелгән алгоритмға ярашлы тәҡдим ителгән сығанаҡта (һүҙлектәрҙә, белешмәләрҙә) кәрәкле конкрет мәғлүмәтте табырға;

– дөрөҫ һәм дөрөҫ булмаған мәғлүмәтте үҙ аллы йәки уҡытыусы тәҡдим иткән тикшереү ысулы нигеҙендә асыҡларға (һүҙлектәргә, белешмәләргә, дәреслеккә мөрәжәғәт итергә);

– интернетта мәғлүмәт эҙләгәндә ололар (педагогик хеҙмәткәрҙәр, ата-әсәләр, законлы вәкилдәр) ярҙамында мәғлүмәт хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен үтәргә (һүҙҙең яҙылышы һәм әйтелеше, һүҙҙең мәғәнәһе, һүҙҙең килеп сығышы , һүҙҙең синонимдары тураһында мәғлүмәт); уҡыу бурысына ярашлы текст, видео, график, тауыш мәғлүмәтен анализларға һәм эшләргә;

– таблицалар, схемалар рәүешендә теркәлгән лингвистик мәғлүмәтте төшөнөргә; лингвистик мәғлүмәтте сағылдырыу өсөн схемалар, таблицаларҙы үҙ аллы төҙөргә.

1-4- се кластарҙа «Туған (башҡорт) тел» дәресен өйрәнеү һөҙөмтәһендә уҡыусы универсаль **коммуникатив** уҡыу ғәмәлдәре сараларына эйә була.

***Аралашыу:***

– фекерҙәрҙе ҡабул итергә һәм формалаштырырға, таныш булған мөхиттә аралашыу маҡсаттарына һәм шарттарына ярашлы хис-тойғоларҙы белдерергә; әңгәмәсегә ихтирамлы мөнәсәбәт күрһәтергә, диалогтар һәм дискуссиялар алып барыу ҡағиҙәләрен үтәргә;

– төрлө фекерҙәр, ҡараштар булыу ихтималлығын танырға;

– үҙ фекереңде әҙәпле һәм нигеҙле итеп әйтергә; ҡуйылған бурысҡа ярашлы телмәр төҙөргә;

– телмәр ситуацияһына ярашлы телдән һәм яҙма текстар (һүрәтләү, фекерләү, хикәйәләү) булдырыу;

– парлы һәм төркөмләп эшләү, күҙәтеү һөҙөмтәләре, башҡарылған мини-тикшеренеү, проект эше нигеҙендә ҡыҫҡа сығыштар әҙерләргә;

– сығыш тексына иллюстрация һайларға (һүрәттәр, фотолар, плакаттар);

***уртаҡ эшмәкәрлек:***

– уҡытыусы тәҡдим иткән планлаштырыу форматы, аралаш аҙымдарҙы һәм ваҡытты бүлеү нигеҙендә, стандарт ситуацияға ярашлы ҡыҫҡа ваҡытлы һәм оҙайлы ваҡытҡа иҫәпләнгән шәхси маҡсаттар ( коллектив бурыстарҙы хәл итеүҙәге) төҙөргә;

– уртаҡ эшмәкәрлектең маҡсатын ҡабул итергә, уға ирешеү буйынса күмәкләп эш алып барырға: ролдәрҙе бүлергә, һөйләшеп килешергә, процесты һәм уртаҡ эш һөҙөмтәһен тикшерергә;

– етәкселек итергә, йөкләмәләр үтәргә, буйһонорға, бурыстарҙы, бәхәсте үҙ аллы

хәл итергә;

– дөйөм эштә үҙ өлөшөндө яуаплы башҡарырға; дөйөм һөҙөмтәгә индергән өлөшөндө баһаларға;

– тәҡдим ителгән өлгөләргә таяныл, дөйөм проект эштәрен башҡарырға.

1-4 - се кластарҙа «Туған (башҡорт) теле» дәресен өйрәнеү һөҙөмтәһендә уҡыусы универсаль **регулятив** белем биреү эшмәкәрлегенә эйә була.

***Үҙ - үҙеңде ойоштороу:***

– уҡыу бурысын хәл итеүҙә һөҙөмтә алыу өсөн эште планлаштырырға;

– һайланған эштәрҙең эҙмә-эҙлелеген билдәләү;

***үҙконтроль:***

– уҡыу эшмәкәрлегенең уңыш/уңышһыҙлыҡ сәбәбен асыҡлау; телмәр һәм орфография хаталарын төҙәтеү өсөн уҡыу эшмәкәрлегенә төҙәтмәләр индерергә;

– тел берәмектәрен бүлеү, характеристика биреү, файҙаланыу буйынса ҡуйылған уҡыу бурыстары менән эшмәкәрлек һөҙөмтәһен тура килтерергә;

– тел материалы менән эшләгәндә ебәрелгән хатаны табырға, орфографик һәм пунктуацион хатаны табырға;

– үҙ эшмәкәрлегең һәм класташтар эшмәкәрлеге һөҙөмтәләрен сағыштырырға, уларҙы тәҡдим ителгән критерийҙар буйынса объектив баһаларға.

**Предмет һөҙөмтәләре**

1-4-се кластарҙа «Туған (башҡорт) теле» дәресен өйрәнеүҙә:

– кешелектең төп аралашыу сараһы булараҡ телдең ролен аңларға, башҡорт телен башҡорт халҡының төп рухи-әхлаҡи ҡиммәттәренең береһе булыуын төшөнөргә; халыҡ йолалары һәм мәҙәниәтен тейешенсә үҙләштереү өсөн башҡорт теленең әһәмиәтен аңларға; туған телгә ҡыҙыҡһыныу һәм уны өйрәнеү теләген булдырырға;

– Рәсәй Федерацияһы тел һәм мәҙәни киңлегенең берҙәмлеге һәм күп төрлөлөгө, Рәсәй халыҡтарының башҡа телдәре араһында башҡорт теленең урыны тураһында тәүге ҡараштарҙы формалаштырырға;

– башҡорт теленең фонетикаһы, лексикаһы, грамматикаһы, орфографияһы һәм пунктуацияһы тураһында башланғыс белемдәрҙе формалашыутырырға;

– телмәр эшмәкәрлегендә алған белемде файҙалана белеүҙе формалаштырырға, телмәрҙә өйрәнелгән лексиканы ҡулланырға, үҙләштерелгән лексиканы һәм алынған тел

белемен файҙаланып, телдән аралашыуҙа ҡатнашыу, өйрәнелгән телмәр этикеты формулаларын телмәрҙә ҡулланыу;

– башҡорт телендә телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәренең (тыңлап аңлау, һөйләшеү, уҡыу һәм яҙыу) формалашыуы һәм үҫеше,алған белемде файҙаланып, бирелгән тема буйынса ҙур булмаған хикәйәләр төҙөү оҫталығын тәьмин итергә.

## Кластар буйынса планлаштырылған һөҙөмтәләр

### 1-се класс

Уҡыусы

– уҡытыусының башҡорт телендәге телмәрен тыңлап аңлап ҡабул итергә;

– уҡытыусы артынан һүҙ, һүҙбәйләнеш, һөйләмдәрҙе ҡабатларға;

– предметтың исемен, предметтың билдәһен, предметтың эш-хәрәкәтен (танышыу маҡсатында, терминһыҙ) аңлатҡан һүҙҙәрҙе асыҡларға;

– һүҙҙе һәм һөйләмде айыра белергә;

– һөйләмдең мәғәнәһен тыңларға һәм аңларға;

– һөйләмдең график схемаһын төҙөргә;

– һөйләмдәрҙе төҙөгәндә һәм һөйләшеү телмәрендә ярҙамсы һүҙҙәрҙе (*һәм, менән; ғына-генә, ҡына- кенә*) ҡулланырға;

– һөйләм мәғәнәһен тәрәнәйтеү өсөн һүҙҙе һөйләмдәргә ҡушырға;

– өн һәм хәрефте айырырға;

– һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙе айырырға;

– һүҙҙең ябай өн график моделен төҙөргә (3-5 өндән);

– һүҙҙә баҫым төшкән өндө билдәләргә;

– башҡорт һүҙендә баҫымдың һуңғы ижеккә (өнгә) төшөүен аңларға;

– алфавиттың хәрефтәрен, уларҙың атамаларын өйрәнергә; алфавиттың функцияһын аңларға;

– ишеткән һүҙҙе йәки һөйләмде хәрефтәр менән яҙырға;

– 3-4 өндән торған һүҙҙең өн моделен төҙөргә; уны һүҙҙең хәрефле яҙмаһына үҙгәртергә;

– дәфтәр битенә яҙып өйрәнергә: горизонталь, ҡыя һыҙыҡтарҙы, дәфтәрҙәрҙең эш һыҙығын айырырға;

– хәрефтәрҙе дөрөҫ яҙа белергә, уларҙы каллиграфик нормалар буйынса тоташтырырға;

– хәреф элементтарының һыҙмаларын сағыштырырға, уларҙың оҡшашлығын һәм

айырмалыҡтарын табырға;

– һүҙҙең һәр хәрефен дөрөҫ тоташтырырға, һөйләмдә һүҙҙәрҙе айырым яҙырға;

– һөйләмдәрҙе күсереп яҙырға (3-4 һүҙ), 3-4 һөйләмдән торған тексты (12-15 һүҙ) яҙып алырға;

– һүҙҙәрҙе һуҙынҡы өнгә ориентир тотоп уҡырға;

– яйлап ижекләп һәм артабан тулы һүҙҙәр менән уҡырға күсергә;

– дәреслектән, таҡтанан һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе (тәүҙә өс һүҙҙән) күсереп алырға;

– һүҙҙәрҙе (3-4 хәреф), һөйләмдәрҙе (3-4 һүҙ) диктант итеп яҙырға;

– халыҡтың төп аралашыу ҡоралы булараҡ телдең ролен аңларға; мәктәптә белем алыу, мәғлүмәт алыу ысулы булыуын аңларға;

– уҡытыусы етәкселегендә уҡыу материалын тикшергәндә диалогта ҡатнашырға;

– алфавитта хәрефтәрҙең билдәле бер тәртиптә бирелгәнен аңларға; башҡорт һәм рус телдәре алфавитының бер төрлө хәрефтәрен белергә;

– нәҙек һуҙынҡыларҙы [ә], [ө], [ү], [э] һәм ҡалын һуҙынҡы өндәрҙе[а], [о], [у], [ы] айырырға;

– һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр таблицаһын ҡарарға һәм күҙәтергә (танышыу маҡсатында);

– һүҙ өндәрен ишетеп айырырға һәм атарға;

– 4-5 өндән торған һүҙҙең өн моделен төҙөргә;

– бер өн менән айырылып торған бәләкәй һүҙҙәрҙе сағыштырырға;

– һүҙҙе күҙәтергә һәм уларҙың өндәрен сағыштырырға, анализларға;

– текста хикәйәләү һәм һорау һөйләмдәрен асыҡларға;

– һөйләмдәрҙең үрҙәге төрҙәрен тыңларға (уҡытыусы уҡый) һәм интонацияны ишетергә, уҡытыусы артынан ҡабатларға һәм артабан дөрөҫ интонация менән уҡыуҙы автоматлаштырырға;

– һүрәттәр, күҙәтеүҙәр буйынса һүҙҙәр йыйылмаһынан һөйләмдәр (3-5 һүҙҙән) һәм текстар (4-5 һөйләмдән) дөрөҫ төҙөргә;

– үҙ аллы (предметтың атамаһы, предмет билдәһе, предметтың эш-хәрәкәте) һәм ярҙамсы һүҙҙәрҙе *(һәм, менән; ғына-ҡына, генә-кенә)* ишетеп билдәләү; текста уларҙы тейешле һыҙыҡтар менән күрһәтеү; телдән һәм яҙма телмәрҙә урынлы ҡулланыу;

– бирелгән һүҙҙәрҙе мәғәнәһенә (предметтың атамаһы, предметтың билдәһе, предметтың эш-хәрәкәте) ҡарап төркөмдәргә (һүҙ төркөмдәре, терминһыҙ) бүлергә һәм был һүҙҙәр төркөмөн берҙәм график-символик схема менән билдәләргә;

– аңлатмалы һүҙлек менән эшләргә, таныш булмаған һүҙҙең мәғәнәһен

асыҡларға;

– тыңлап, ҡалын [а], [о], [у], [ы] һәм йомшаҡ [ә], [ө], [ү], [и], [э] һуҙынҡы өндәре булған һүҙҙәрҙе специфик әйтелешен төшөнөргә;

– текста йомшаҡ әйтелешле һәм ҡаты әйтелешле төп башҡорт һүҙҙәрен асыҡларға;

– ҙур булмаған тикшереүҙәр алып барырға: башҡорт һәм рус телдәре һүҙҙәрен күҙәтергә, сағыштырырға (*мәл*–[мәл], *мял* –[м'ал]);

– һүҙҙәрҙе тыңларға һәм һүҙҙә (һуҙынҡы өн) баҫымдың һуңғы ижеккә (өнгә) төшөүен аңларға;

– һөйләм башында, кеше исемдәрен һәм фамилияларын баш хәреф менән яҙырға;

– Һүҙҙәр араһындағы бушлыҡ, күсереү билдәһе кеүек график сараларҙы ҡулланырға;

– һөйләм аҙағында тыныш билдәләре (нөктә, һорау билдәһе) ҡуйырға;

– үҙ эшеңде контролдә тоторға һәм баһаларға, хәреф, һүҙ һәм һөйләм яҙмаларын төҙәтергә;

– күсереп алынған текстағы хаталарҙы тикшерергә һәм төҙәтергә;

– алфавиттағы хәрефтәрҙе, һүҙҙәге хәрефтәрҙе тоташтырыуҙы һәм һөйләмдәге һүҙҙәрҙе айырым яҙыуҙы автоматлаштырырға;

– һөйләмде (5-6 һүҙ), 5-6 һөйләмдән торған тексты (10-15 һүҙ) күсереп алырға;

– диктант яҙырға (өйрәтеү диктанты, 10-15 һүҙ) өйрәнә.

**2 - СЕ класс**

Уҡыусы

- һүрәттәр сюжеты, дәреслек материалдары сюжеты буйынса һөйләмдәр (3-5 һүҙ, ҙур булмаған 3-5 һөйләмдән текстар) төҙөргә;

– объекттарҙы, тәбиғәт күренештәрен күҙәтергә һәм күргәндәрен туған телдә һөйләргә;

– һүҙҙең мәғәнәһен контекст буйынса йәки аңлатмалы һүҙлек буйынса билдәләргә;

– башҡорт телендәге телмәрҙән кәрәкле мәғлүмәтте айырып күрһәтергә;

– һөйләү һәм яҙма телмәрҙә предметты, предметтың эш-хәрәкәтен, предмет билдәһен аңлатҡан һүҙҙәрҙе, ярҙамсы һүҙҙәрҙе дөрөҫ ҡулланырға;

– һөйләм төрҙәрен (хәбәр һөйләм, һорау һөйләм) билдәләргә һәм уларҙы дөрөҫ интонация менән уҡырға;

– һүҙҙең бер хәрефен (өн) икенсе хәреф (өн) менән алмаштырғанда һүҙ мәғәнәһенең үҙгәреүен төшөнөргә;

– нәҙеклеге/ҡалынлығы буйынса парлы һуҙынҡыларҙы [ә]–[а], [ө]–[о], [ү]–[у], парһыҙ һуҙынҡыларҙы [ы], [и], [э] айыра белергә;

– башҡорт теленең үҙенсәлекле тел күренешен: һүҙҙә тартынҡылар сиратлашыуын [ғ]– [ҡ], [г]– [к], [б]–[п] күҙәтергә;

– предметтың атамаһын аңлатҡан һәм «кем?», «нимә?» һорауҙарына яуап биргән һүҙҙәрҙе төшөнөргә;

– предметтың эш-хәрәкәтен аңлатҡан һәм «нимә эшләй?» тигән һорауға яуап биргән һүҙҙәрҙе асыҡларға;

– «ниндәй?» һорауына яуап биргән, предмет билдәһен аңлатҡан һүҙҙәрҙе төшөнөргә;

– ярҙамсы һүҙҙәрҙең ролен (функцияһын) аңларға *(дә-да, ҙә-ҙа, лә-ла, тә-та; генә-кенә, ғына-ҡына)*;

– нәҙек һуҙынҡылар [ә], [ө], [ү], [и], [э] (һүҙ уртаһында) һәм ҡалын һуҙынҡылар[а],[о],[у],[ы] менән һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙырға;

– һүҙ башында һәм һүҙ уртаһында [йә], [+йө], [йү], [йы], [йо] хәреф ҡушылмалары менән һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙырға;

– һүҙ башында ике өндө аңлатҡан хәрефтәр е, ю, я яҙылыу ҡағиҙәһен аңларға;

– рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә *е, ё, ю, я*, шулай уҡ башҡорт һүҙҙәрендә лә был хәрефтәрҙе дөрөҫ яҙыу үҙенсәлектәрен иҫәпкә алырға;

– башҡорт һүҙҙәрендә баҫым, ҡағиҙә булараҡ, һуңғы ижеккә төшә һәм ялғау ҡушылғанда ла һуңғы ижеккә күсеүен аңларға;

– *в* хәрефе менән башланған һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтеү үҙенсәлектәрен аңларға;

– орфограммаларҙы билдәләп, текстарҙы (7-8 һөйләм) дөрөҫ күсереп алырға;

- һүҙҙәрҙә тамыр һәм ялғауҙарҙы (ябай осраҡтар) айырып билдәләргә ө й р ә н ә.

**3- СӨ класс**

Уҡыусы:

– башҡорт теленең Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле һәм рус теле Рәсәй Федерацияһының дәүләт теле булараҡ әһәмиәтен аңлатырға;

– телдән һәм яҙма телмәргә эйә булыу - белем алыуҙың, шәхес үҫтереүҙең төп шарты икәнен аңларға;

– тел күренештәрен аңлау: һүҙҙең тура һәм күсмә мәғәнәһе (ябай осраҡтарын); бер һәм ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәрҙе асыҡлау;

– һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙе айырырға;

– башҡорт телендәге үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә нәҙек һәм ҡалын, парлы яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларҙы айырырға;

– һүҙлектәр, белешмәләр һ.б. менән эшләгәндә алфавитты ҡулланырға;

– һөйләшеү һәм уҡыу процесында дөрөҫ интонацияны һаҡларға;

– заман башҡорт әҙәби теле нормаларына таянып баҫымды дөрөҫ ҡуйырға;

– практик мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн орфоэпик һүҙлекте файҙаланырға;

– һүҙҙең өндәренә һәм хәрефтәренә анализ яһарға (орфограммалар булған һүҙҙәрҙә);

– һүҙҙә йомшаҡ һәм ҡалын айырыу билдәләренең функцияһын төшөнөргә;

– текстан тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәрҙе айырырға;

– һүҙҙең тамырын һәм ялғауын айырып күрһәтергә; бирелгән һүҙгә тамырҙаш ( бер тамырҙан) һүҙҙәр һайлап алырға;

– исемде асыҡлау: телмәрҙәге дөйөм мәғәнәһе, һорауҙары, ҡулланыу;

– рус теленән айырмалы рәүештә, башҡорт телендә йәнле/ йәнһеҙ исемдәрҙең үҙенсәлектәрен төшөнөргә;

– башҡорт телендә исемдәрҙең эйәлек категорияһының ике төрөн айыра белергә (һүҙҙәр ярҙамында): 1) *минең, һинең, беҙҙең*; 2) һүҙҙең тамырына ялғау ҡушыу ярҙамында-*ныҡы, -неке, -ноҡо, -нөкө, -дыҡы, -деке, -доҡо, -дөкө, -тыҡы, -теке, -тоҡо, -төкө, -ҙыҡы, -ҙеке, -ҙоҡо, -ҙөкө*;

– исемдәрҙе яһауҙың ике ысулын - һүҙҙәрҙе ҡушыу һәм ҡабатлау юлын айырырға;

– сифатты танып белеү: дөйөм мәғәнәһе, һорауҙары, телмәрҙә ҡулланыу; төрҙәре (төп һәм шартлы);

– рәүеште танып белеү: мәғәнәһе, һорауҙары, телмәрҙә ҡулланыу;

– ҡылымдарҙы (дөйөм мәғәнәһен, һорауҙарын, телмәрҙә ҡулланыуҙы) асыҡларға;

– ҡылымдарҙы һандар, заттар буйынса үҙгәртергә;

– һөйләмдәге һүҙҙәр араһындағы мәғәнәүи (синтаксик) бәйләнеште һорауҙар ярҙамында билдәләргә;

– текст һөйләмдәрендә баш һәм эйәрсән киҫәктәрҙе дөрөҫ билдәләргә һәм һыҙырға;

– йыйнаҡ һәм таркау һөйләмдәрҙең айырмаһын айырып күрһәтергә;

– һөйләмдә тиң киҫәктәрҙе билдәләргә;

- хата барлыҡҡа килеү ихтималлығы урынын аңларға һәм мәсьәләне хәл итеү ысулдарын табырға;

– үҙе төҙөгән һәм тәҡдим ителгән текстарҙы тикшергәндә үҙен контролдә тоторға;

– һүҙҙе дөрөҫ яҙыуҙы асыҡлау өсөн орфографик һүҙлек менән ҡулланырға;

– түбәндәге орфограммаларҙы дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре менән файҙаланырға:

– республиканың административ райондары һәм ҡалаларының исемдәрен; китаптарҙың, газеталарҙың, журналдарҙың исемдәрен баш хәреф менән дөрөҫ яҙырға;

– ярҙамсы һүҙҙәрҙең айырым яҙылыуы (*дә-да, ҙә-ҙа, лә-ла, тә-та*);

– ике өндө белдергән хәрефле һүҙҙәр (*е,ё, ю, я*);

– үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә ҡуш тартынҡылы һүҙҙәр;

– әйтеү маҡсаты буйынса һәм хис-тойғоло һөйләмде айыра белергә;

– диалогта үҙеңдең фекереңде факттар менән дәлилләргә;

– парлап һәм төркөмләп эш башҡарғанда бергәләп эш итеү процесын контролдә тоторға;

– ҙур булмаған текстар яҙырға: изложение, инша, хат, СМС-хәбәр (4-6 һөйләм);

– орфограммаларҙы айырып күрһәтеп, текстарҙы (8-9 һөйләм) дөрөҫ күсереп алырға;

– диктант (55-60 һүҙ) яҙырға өйрәнә.

**4- СЕ класс**

Уҡыусы:

– Рәсәй Федерацияһы территорияһында телдәрҙең һәм мәҙәниәттәрҙең күп төрлөлөгөн ; Рәсәйҙең һәр халҡының төп рухи-әхлаҡи ҡиммәттәренең береһе туған телде икәнен төшөнөргә;

– туған (башҡорт) телдең аралашыу сараһы, рухи-әхлаҡи үҫеш сығанағы булыуын аңларға;

– дөрөҫ һөйләү һәм яҙма телмәрҙе кешенең дөйөм мәҙәниәт күрһәткесе буларак аңларға;

– һөйләшеү һәм уҡыу процесында дөрөҫ интонацияны һаҡларға;

– һөйләмдәрҙә һәм текста күп мәғәнәле һүҙҙәрҙе асыҡларға;

– башҡорт телендәге һөйләм төҙөлөшө үҙенсәлектәрен аңларға;

– һөйләмдә тиң эйәләрҙе һәм тиң хәбәрҙәрҙе билдәләргә;

– һөйләмдә өндәш һүҙҙе табырға һәм мәғәнәһен аңлатырға;

– аралашыу практикаһында һөйләү һәм яҙма телмәрҙе ҡулланырға;

– текст төҙөргә; уны мәғәнәүи өлөштәргә бүлергә һәм исем бирергә;

– текста күп мәғәнәле һүҙҙәрҙе айырып күрһәтергә ( төп башҡорт фразелогизмдары);

– бирелгән параметрҙар буйынса өндәрҙҙе күҙәтеү, сағыштырыу, анализлау, классификациялау;

– һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелешен билдәләгәндә башҡорт теленең орфоэпик һүҙлеген ҡулланырға;

– билдәләнгән морфемалар буйынса һүҙҙәрҙе составы буйынса анализларға; һүҙ составы схемаһын төҙөргә;

– һүҙҙең билдәле бер һүҙ төркөмөнә ҡарағанлығын билдәләргә;

– исемдәрҙең грамматик билдәләрен билдәләргә: һанын, затын (эйәлек категорияһы), килешен;

– бирелгән текста үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе (исемдәрҙе) танырға (ябай осраҡтар);

– үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә (исемдәр) ялғауҙарҙың (ябай осраҡтар) дөрөҫ яҙылышын өйрәнергә;

– текста сифаттарҙы асыҡларға;

– сифаттың сағыштырыу дәрәжәһен айырып күрһәтергә;

– һүҙ төркөмө буларак сифатҡа характеристика бирергә;

– һөйләмдәр, текстар төҙөгәндә сифаттарҙы ҡулланырға;

– текст эсендә алмаш һүҙ төркөмдәрен танырға;

– рәүештең төп мәғәнәһен аңларға;

– ҙур булмаған тикшеренеү эшмәкәрлегендә ҡатнашырға: исем һәм алмаш һүҙ төркөмдәрен күҙәтергә, уларҙың оҡшаш һәм айырмалыҡтарын билдәләргә;

– зат, күрһәтеү, һорау алмаштарын билдәләргә;

– ҡылымдың грамматик билдәләрен билдәләргә: һанын, затын,заманын, яһалышын;

– һүҙ төркөмө буларак ҡылымды тикшерергә;

– рәүеш төрҙәрен танырға;

– ҙур булмаған тикшеренеү эшмәкәрлегендә ҡатнашырға: рәүештең һәм сифаттың оҡшашлыҡтарын һәм айырмалыҡтарын, уларҙың һөйләмдәге функцияларын билдәләргә;

– текстан һан һүҙ төркөмөн айырып күрһәтергә;

– һан һүҙ төркөмөн асыҡларға; һандың мәғәнәһен, төрөн билдәләргә; уға һорау бирергә, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланырға;

– һан һүҙ төркөмөнөң яһалышын күҙәтергә (ябай осраҡтар);

– һөйләм, һүҙбәйләнеш һәм һүҙҙе айыра белергә;

– әйтелеү маҡсаты буйынса һөйләмдәрҙе классификацияларға;

– йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәрҙе айыра белергә;

– тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе айырырға; телмәрҙә тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе файҙаланырға;

– ябай һөйләмгә синтаксик анализ үткәрергә;

– өйрәнелгән ҡағиҙәләр буйынса орфограммаларҙы табырға;

– дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен, шул иҫәптән: китап, газета, журнал исемдәрендә баш хәрефтең; башҡорт телендә үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙы дөрөҫ яҙыу, ярҙамсы һүҙҙәрҙе айырым яҙыу (*ғына-генә,ҡына-кенә*; *дә-да,ҙә-ҙа, лә-ла, тә-та*); *е, ё, ю, я* хәрефтәре алдынан ҡалын һәм нәҙек айырыу билдәләрен, исемдәрҙә һәм ҡылымдарҙа ҡуш тартынҡылаҙы яҙа белергә;

– күләме 70 һүҙҙән артмаған текстарҙы дөрөҫ күсереп алырға;

– дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен иҫәпкә алып, 65 һүҙҙән кәм булмаған диктант яҙырға;

– өйрәнелгән ҡағиҙәләр буйынса орфографик һәм пунктуацион хаталарҙы табырға һәм төҙәтергә;

– аралашыу ситуацияһын аңларға (ниндәй маҡсат, кем менән, ҡайҙа бара); аралашыу шарттарында берҙәй тел сараларын һайларға;

– орфоэпик нормаларҙы, дөрөҫ мәғлүмәтте, телмәр мәҙәниәте нормаларын һаҡлап телдән (4-6 һөйләм)диалог һәм монолог текстары төҙөргә;

– конкрет яҙма аралашыу ситуацияһы өсөн телдән һәм яҙма(3-5 һөйләм) текстар (хаттар, ҡотлау открыткалары һ.б.)төҙөргә;

– тексты темаһын һәм төп фекерен билдәләргә; темаға һәм төп фекергә таянып, текстҡа үҙ аллы исем бирергә;

– бирелгән текст буйынса план төҙөргә;

– тексты ентекле һөйләргә өйрәнергә (телдән һәм яҙма);

–тексты айырым урындарҙы,эпизодтарҙы һайлап һөйләргә өйрәнергә (телдән);

–бирелгән темалар буйынса инша яҙырға (әҙерлек эшенән һуң);
–уҡыуҙың танышыу, өйрәнеү, мәғлүмәт эҙләү төрҙәре менән эш итергә;
–уҡыған (тыңланған) мәғлүмәт нигеҙендә телдән һәм яҙма ябай һығымталар яһарға;
–текстағы мәғлүмәтте интерпретацияларға һәм дөйөмләштерергә;
–өйрәнелгән төшөнсәләрҙең мәғәнәһен үҙ һүҙҙәре менән аңлатып бирергә;
–һүҙҙең мәғәнәһен аңлатмалы һүҙлек һәм башҡа сығанаҡтар ярҙамында асыҡлау буйынса эшләргә өйрәнә .

**ТЕМАТИК ПЛАНЛАШТЫРЫУ**

Программаны тормошҡа ашырыу барышында уҡытыу-методик материал булараҡ (мультимедиа программалары.электрон дәреслектәр һәм әсбаптар,электрон китапханалар,виртуаль лабораториялар,уйын программалары,һанлы белем биреү ресурстар коллекциялары) электрон белем биреү мөмкинлектәре иҫәпкә алынырға тейеш. (Ҡушымта).

Айырым бүлекте өйрәнеүгә тәҡдим ителгән сәғәттәр һаны уҡыусыларҙың белем кимәленә бәйле һәм белем биреү ойошмаһы бүлгән сәғәттәр һанына ярашлы үҙгәрергә мөмкин.

1-се класс – 98С.

| Б Үле к | Программа йөкмәткеһе | Уҡыусыларҙың эшмәкәрлеге төрҙәре |
|---|---|---|
| **Грамотаға өйрәтеү (64с.)** | | |
| Синтаксис.<br>Лексика.<br>Телмәр үҫтереү (7 ч.) | Телмәр(һөйләү/яҙма). Предметтың атамаһын, билдәһен,эш-хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр(терминдарһыҙ,танышыу маҡсатында).<br>Яҙыу.Хәреф элементтарын яҙыу, штрихлау, һүрәттәр буяу.Телмәр үҫтереү.«Йәйге уйындар», «Мин – уҡыусы!» | Уҡыу диалогы. Телмәр ситуацияларын булдырыу. Уҡытыусы артынан һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе тыңлау һәм ҡабатлау. Үҙеңә йүнәлтелгән телмәрҙе аңлай белеү. Һорауҙарға яуап биреү. Һүҙҙәрҙе айырыу: предметты, хәрәкәтте, билдәләне белдергән һәм ярҙамсы һүҙҙәр. Дәфтәр битендә горизонталь, ҡыя һыҙыҡтарҙы, эш һыҙыҡтарын айырыу. Хәреф элементтарын яҙыу, штрихлау, һүрәттәрҙе буяу. «Йәйге уйындар», «Мин - мәктәп уҡыусыһы!» тигән дәреслектәге иллюстрация буйынса әңгәмә (диалог). Һорауҙарға яуаптар. «Йәйге уйындар», «Мин - мәктәп уҡыусыһы!» картиналары буйынса һөйләмдәр, текстар төҙөү. |

| | | |
|---|---|---|
| | Һөйләм.Һөйләмгә һүҙҙәр ҡуйыу. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре.Һөйләмдә ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен (һәм, менән, ҡына-кенә, ғына-генә) ҡулланыу. Һөйләмдең график моделе.Хәрефтәрҙе яҙыу элементтары.Телмәр үҫтереү. «Минең ғаиләм», «Әсәйем эштә саҡта», «Балаларҙың йәйге уйындары» сюжетлы картиналары. | Һөйләмде тыңлау һәм мәғәнәһен аңлау. Һөйләмдең график моделен төҙөү. Бирелгән һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙөү (3 - 4 һүҙҙән). Һөйләмдә ярҙамсы һүҙҙәрҙе таныу (һәм, менән, ҡына-кенә, ғына-генә). Уларҙы һөйләү телмәрендә ҡулланыу. «Минең ғаиләм», «Әсәйем эштә саҡта», «Балаларҙың йәйге уйындары» сюжетлы картиналар буйынса буйынса эш: 3-4 һүҙҙән торған һөйләмдәр төҙөү. Хәрефтәрҙе яҙыуға әҙерлек: штрихлау, буяу, хәреф элементтарын яҙыу. |
| Фонетика. Орфоэпия<br>Телмәр үҫтереү (6 ч.) | Телмәр өндәре. Һүҙ һәм өн. Өндө һүҙҙән айырып алыу һәм дөрөҫ интонация менән әйтеү. Һүҙҙә өндәрҙең эҙмә-эҙлелеге. Һүҙҙең график өн моделе. Телмәр үҫтереү. «Әлифбала» хайуадар донъяһы», «Бесәй сәйәхәт итә» һүрәттәре. Хәреф элементтарын яҙыу. | Өндө тыңлау. Айырым өндәрҙе телмәр (һүҙ) ағымынан айырып алыу һәм дөрөҫ интонация менән әйтеү. Һүҙҙә өндәрҙең эҙмә-эҙлелеген билдәләү. Һүҙҙең график өн моделен төҙөү. Нәҙек [ә], [ө], [ү], [э ](е) һуҙынҡыларын [а], [о], [у], [ы] ҡалын һуҙынҡыларынан ишетеп айыра белеү. Бер өн менән айырылған бәләкәй һүҙҙәрҙе сағыштырыу. Һүрәттәр буйынса эш: «Әлифбала» хайуадар донъяһы», «Бесәй ҡайҙа бараһың». Бармаҡ мускулдарын эшкәртеү, ҡул моторикаһын үҫтереү: штрихлау, буяу, хәреф элементтарын яҙыу |
| | Һүҙ һәм өн. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙе айырыу. Айырыу ысулдары. Ҡалын [а], [о], [у], [ы]; нәҙек [ә], [ө], [ү], | Һүҙҙе тыңлау. Өндө һүҙҙән айырып алыу һәм дөрөҫ интонация менән әйтеү.<br>Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙе айырыу. һуҙынҡы («тешләшмәй») һәм тартынҡы («тешләшә») торған өндәрҙе айырыу ысулын |

| | | |
|---|---|---|
| | [и], [э] һуҙынҡы өндәре. Һүҙҙең график өн моделе. Ижек. Һүҙ баҫымы. Баҫымлы ижекте дөрөҫ интонация менән әйтеү. Халыҡ ижадының бәләкәй жанрҙары (һамаҡтар, һанашмаҡтар һәм башҡалар). Улар менән уйын-импровизация. Телмәр үҫтереү. «Умартасы. Олатайҙар һөнәрҙәре», «Аҡландағы бал ҡорттары». | эҙләү. Символик билдәләр ярҙамында тауышты график теркәү. 3-4, 4-5 өндән торған һүҙ моделен төҙөү. Һуҙынҡыларҙы ҡалын [а], [о], [у], [ы]; нәҙек [ә], [ө], [ү], [и], [э] өндәргә бүлеү. Һүҙҙе ижектәргә бүлеү ысулын аңлау «Һүҙ баҫымы» төшөнсәһен аңлау Башҡорт һүҙендәге баҫымдың башлыса һуңғы ижеккә (һуҙынҡы өнгә) төшөүен аңлау. Халыҡ ижадының бәләкәй жанрҙары менән ҡыҙыҡһыныу (һамаҡтар, һанашмаҡтар һәм башҡалар) һәм уның йөкмәткеһе буйынса уйын-импровизацияла ҡатнашыу. «Бесәйкәй, ҡайҙа юл тоттоң?» һанашмағын инцениpовкалау. «ата-бабалар һөнәренә өйрән!», «Аҡландағы бал ҡорттары» һүрәттәре буйынса эш. Бармаҡ мускулдарын эшкәртеү, ҡул моторикаһын үҫтереү: штрихлау, буяу, хәреф элементтарын яҙыу |
| Графика.Фонетика.Лексика. Телмәр үҫтереү. (49с.) | Хәреф. Өн. Алфавит. Өндөң график сағылышы. Һүҙҙең өн моделе. Өйрәнелгән хәрефтәрҙе һүҙҙең график моделендәге шаҡмаҡҡа ҡуйыу: Әә-Аа, Өө-Оо. Һүҙҙәрҙе һуҙынҡы өнгә иғтибар йүнәлтеп уҡыу. Хәрефте яҙыуы. Телмәр үҫтереү. «Олатайға бүләк», «Өтәс - ихатабыҙ хужаһы», «Олатайым янында умарталыҡтағы мажаралар» һүрәттәре. Халыҡ кәсептәрен, | Алфавитты, ундағы хәреф атамаларын өйрәнеү, алфавит функцияһын төшөнөү. (Әә-Аа, Өө-Оо) хәрефтәрен өйрәнеү. Һүҙҙең өн моделе. Өн һәм хәреф айырмаһы. Өндө хәреф менән билдәләү. Өйрәнелгән хәрефкә һүҙҙәр һайлау. «Әлифба» дәреслеге менән эшләү. Әә-Аа, Өө-Оо хәрефтәрен һүҙҙең график моделе шаҡмаҡтарына ҡуйыу һәм уҡыу. Иғтибарҙы һуҙынҡы өнгә йүнәлтеп, ижектәр, һүҙҙәр (график схемаға таянып) уҡыу. Дәреслектәге «Йорт һәм ҡырағай хайуандар», «Балһөйәр мажаралары» һүрәттәре буйынса эш. Халыҡ кәсептәрен, тйолаларын өйрәнеү. Кешеләрҙең хеҙмәт ҡаҙаныштарына һаҡсыл, хөрмәт менән ҡарарға өйрәнеү. Бармаҡ мускулдарын эшкәртеү, ҡул моторикаһын үҫтереү: штрихлау, |

| | | |
|---|---|---|
| | йолаларынн өйрәнеү | буяу, хәреф элементтарын яҙыу |
| | Үү-У хәрефтәре. Дәрестәрендә хәрефтәр менән яҙылған Рус теле грамотаһына грамотаһына өйрәтеү дәрестәрендә өйрәнгән Ээ (е), ы, Ии хәрефтәрен нығытыу. Һүҙҙең график өн моделен төҙөү. Уны һүҙҙең хәреф яҙмаһына үҙгәртеү. Һүҙҙәрҙе һуҙынҡы өнгә иғтибар итеп уҡыу. Хәрефтәрҙе яҙыу. Телмәр үҫтереү. «Себештәрем,минең себештәрем», «Урманды һаҡлағыҙ!», «Умартасы нимә белергә тейеш?»һүрәттәре. | Алфавиттың Үү - Уу хәрефен өйрәнеү. Ээ (е), Ии, Ыы хәрефтәрен ҡабатлау. Һүрәттәр буйынса эш: «Өтәстәр», «Урманды һаҡла!», «Үҫкәс умартасы булырмын». Хәрефтәрҙе дөрөҫ яҙыу, бер-береһе менән тоташтырыу. Бармаҡ мускулдарын эшкәртеү, ҡул моторикаһын үҫтереү: штрихлау, буяу, хәреф элементтарын яҙыу. Контроль һәм баһалау, яҙылған хәрефтәрҙе төҙәтеү. |
| | Мм, Нн, Рр, Лл хәрефтәре. Әә– Аа, Өө– Оо, Үү– Уу, Ээ– Ыы– Ии хәрефтәрен нығытыу.Һуҙынҡы һәм тартынҡы хәрефтәрҙең таблицаһы.Һүҙҙәрҙе күсереп яҙыу ҡағиҙәләре. Өлгө буйынса һүҙҙәрҙе күсереп яҙыу. Телмәр | Алфавиттың Мм, Нн, Рр, Лл хәрефтәрен өйрәнеү. .Хәреф элементтарының һыҙмаһын сағыштырыу, уларҙың оҡшашлыҡтарын һәм айырмалыҡтарын асыҡлау. Хәрефтең график образын үҙләштереү буйынса эш. Яңы хәреф менән һүҙҙәр уҡыу. Һуҙынҡылар, тартынҡылар таблицаһын өйрәнеү. Һүҙҙе яҙыу ҡағиҙәләрен өйрәнеү(күҙәтеү, сағыштырыу, классификация). Бирелгән өлгөнән һүҙҙәрҙе ( 2 - 3 һүҙ) күсереп алыу. «Минең һеңлем», «Мәскәү - Рәсәйҙең баш |

| | | |
|---|---|---|
| | үҫтереү. «инең һеңлем», «Мәскәү –Рәсәйҙең баш ҡалаһы », «Минең ҡурайым» һүрәттәре. | ҡалаһы», «Музыка ҡоралдары» иллюстрациялары буйынса эш. Халыҡ музыка ҡоралдарына ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү. Бармаҡ мускулдарын эшкәртеү, ҡул моторикаһы үҫеше: штрихлау, буяу, хәреф элементтары яҙыу. Һүҙҙә хәрефтәрҙе дөрөҫ тоташтырыу һәләтен автоматлаштырыу. |
| | Йй хәрефе. Яя, Ее, Ёё, Юю хәрефтәре.), [йә], [йө], [йо], [йү], [йы], шулай уҡ [әй], [өй], [ой], [үй], [ый] ижектәре (дифтонгылар) булған һүҙҙәрҙе уҡыу һәм яҙыу. Һүҙҙең график өн моделен төҙөү. Уны һүҙҙең хәрефле яҙмаһына үҙгәртеү. Һөйләм башындағы баш хәреф, фекер аҙағындағы нөктә. Өйрәтеүсе диктант. Телмәр үҫтереү. «Май айы», «Йәйҙе һағындылар», «Башҡорт аты» һүрәттәре. | Алфавиттың Йй, Яя, Ее, Ёё, Юю хәрефтәрен өйрәнеү, [йә], [йө], [йо], [йү], [йы], шулай уҡ [әй], [өй], [ой], [үй], [ый] ижектәре (дифтонгылар) булған һүҙҙәрҙе уҡыу һәм яҙыу. Ике өндө белдергән я, е, ё, ю хәреф/өндәре үҙенсәлектәрен өйрәнеү өсөн телмәр ситуациялары булдырыу. Орфографик хата булырлыҡ осраҡтарҙы күҙаллау һәм иҫкәртеү Һүҙҙең график өн моделен төҙөү һәм уны һүҙҙең хәрефле яҙмаһына үҙгәртеү. Диктант итеп ижектәрҙе (6 - 7 ижек) йәки ҡыҫҡа һүҙҙәрҙе (4 - 5 һүҙ) яҙыу. 2 - 3 һөйләмдән торған тексты уҡыу. Һүҙҙең хәрефтәрен дөрөҫ тоташтырыу ,һөйләмдә һүҙҙәрҙе айырым яҙыу. «Май айы», «Йәмле йәй», «Йәйләүҙә» һүрәттәре буйынса эш. Уҡыу эшмәкәрлегендә үҙаллылыҡты, үҙ ҡылыҡтарың өсөн шәхси яуаплылыҡты үҫтереү Бармаҡ мускулдарын эшкәртеү, ҡул моторикаһын үҫтереү: штрихлау, буяу, хәреф элементтарын яҙыу Ишетелгән һүҙ йәки һөйләмде дәфтәргә хәрефтәр менән яҙыу. |
| | Ғғ–Ҡҡ хәрефтәре. Уларҙың специфик үҙенсәлектәре. Рус теле грамотаһына өйрәтеү | Башҡорт алфавитының үҙенсәлекле Ғғ – Ҡҡ хәрефтәрен өйрәнеү. Гг-Кк хәрефтәрен ҡабатлау. Күҙәтеү, сағыштырыу, өйрәнгән өндәрҙе (хәреф) анализлау нигеҙендә уҡыу |

| | | |
|---|---|---|
| | дәрестәрендә танышҡан Гг–Кк хәрефтәрен ҡабатлау. Һөйләмдәрҙе күсереп яҙыу ҡағиҙәләре. Өйрәтеү диктанты. Телмәр үҫтереү. «Һорау-яуаптар» уйыны. «Беҙҙә ҡунаҡтар», «Гөлгөлдәк», «Минең көсөгөм - Пушок» һүрәттәре | диалогы. Г, к, ғ, ҡ хәрефтәренә һүҙҙәр уйлап табыу (төркөмдәр араһында «Кемдә һүҙҙәр күберәк?» уйын-ярышы). Яңы хәрефтәр менән һүҙҙәр, һөйләмдәр, текстарҙы уҡыу һәм яҙыу. Ижектәрҙе (6 - 7 ижек) йәки ҡыҫҡа һүҙҙәрҙе (4 - 5 һүҙ) ижекләп яҙыу. Телмәр үҫтереүгә йүнәлтелгән «Һорау-яуаптар» уйыны: уҡыусы «Ни өсөн?» һорауы менән башланған һөйләм әйтә, башҡалар иһә, үҙ яуабын «сөнки» һүҙен файҙаланып яуап бирә. Һорауға яуапты тулы һәм, ҡайһы саҡта, бер һүҙ менән дә бирергә мөмкин. Бирелгән темаға һәм «Ҡунаҡ килә», «Гөргөлдәк», «Көсөгөм» һүрәттәре буйынса текст (хикәйә) төҙөү. Хәрәкәт уйындары хаҡында һөйләшеү. Уйын ҡағиҙәләрен тикшереү. Бармаҡ мускулдарын эшкәртеү, ҡул моторикаһын үҫтереү: штрихлау, буяу, хәреф элементтарын яҙыу. |
| | Ҙҙ, ҫ. хәрефтәрен өйрәнеү. Рус теле грамматикаһына өйрәтеү дәрестәрендә өйрәнелгән Зз, Сс хәрефтәрен ҡабатлау. Һөйләмдәрҙе уҡыу техникаһы. Яңы хәрефтәр менән ижектәр, һүҙ, һөйләмдәр яҙыу. Өйрәтеүсе диктант. Телмәр үҫтереү. Әкиәт йөкмәткеһенә төшөнөү. «Ике кәзә», «Ҡомһоҙ эт» әкиәттәре | Алфавиттың Зз-ҙҙ, Сс-ҫ хәрефтәрен өйрәнеү. Уларҙың специфик үҙенсәлектәре. Яңы хәрефтәрҙең график образын үҙләштереү буйынса эш. Зз, Сс хәрефтәрен ҡабатлау. Яңы хәрефтәр менән һүҙҙәрҙе,һөйләмдәрҙе ижекләп талғын уҡыу. Өйрәнелгән хәрефтәр менән ижектәрҙән үҙ аллы . Һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр төҙөү. Диктант яҙыу (өйрәтеүсе диктант). Аралашыу ситуацияһына тап килерлек тел сараларын үҙ аллы һайлау эше. «Ике кәзә», «Ҡомһоҙ эт» әкиәттәре иллюстрациялары буйынса эш. Әкиәттең йөкмәткеһе буйынса эш: әкиәт, геройҙар,асылын билдәләү. Тормош тәжрибәһенә таянып фекер алышыу, һорауҙар бирә һәм яуапты баһалай белеү. Һүҙлек запасын |

| | | |
|---|---|---|
| | иллюстрацияһы. | байытыу. Диалогик, монологик телмәр үҫтереү. Бармаҡ мускулдарын эшкәртеү, ҡул моторикаһын үҫтереү: штрихлау, буяу, хәреф элементтарын яҙыу. |
| | Дд-Тт хәрефтәре. Башҡорт теленең үҙенсәлекле парлы өндәре [г]–[к], [ғ]–[ҡ], [ҙ]–[ҫ], [з]–[с], [д]–[т]. Һөйләмде күсереү ҡағиҙәләре. Телмәр үҫтереү. «Дуҫлыҡ монументы», «Төрлө халыҡтарҙың бәхетле балалары», «Төлкө менән торна» иллюстрациялары. | Алфавиттағы Дд – Тт хәрефтәрен өйрәнеү. Парлы үҙенсәлекле өндәрҙең: [г]–[к], [ғ]–[ҡ], [ҙ]–[ҫ] таблицаһын өйрәнеү өсөн уҡыу ситуацияларын булдырыу: Яңы хәрефтәр менән һүҙҙәр уҡыу һәм яҙыу.Һүҙҙәрҙә өндәрҙең сиратлашыуын күҙәтеү: ҡунаҡ– ҡунағы, күрәк – күрәге һ.б.Яңы һүрәтләнгән осраҡтарҙы Маҡтау һәм йыуатыу өсөн һүрәтләнгән ситуацияларҙан сығып этикет формулалары һайлау буйынса ижади эш башҡарыу. Нығынған һүҙбәйләнештәрҙең (дәреслек материалы) мәғәнәһен төшөнөү, яғшы һүҙҙең мөһимлеге,көсө тураһында диалог. «Дуҫлыҡ монументы», «Беҙ – бәхетле балалар», «Төлкө менән торна» һүрәттәре буйынса телмәр үҫтереү буйынса эш. Бармаҡ мускулдарын эшләтеү, ҡул моторикаһын үҫтереү: штрихлау, буяу, хәреф элементтарын яҙыу. Һүҙҙә хәрефтәрҙе дөрөҫ тоташтырыуҙы автоматлаштырыу. Тексты күсереп яҙыу (2 - 3 һөйләм). |
| | Һһ–Хх хәрефтәре. Тексты күсереп яҙыу. Өйрәтеүсе диктант. Һөйләмдәрҙе талғын итеп дөрөҫ уҡыу. Һөйләмдәрҙе тасуири уҡыу (хәбәр итеү, һорау, өндәү - терминдарһыҙ). Телмәр | Алфавиттағы Һһ–Хх хәрефтәрен өйрәнеү. Һһ хәрефенең специфик үҙенсәлектәре. Уҡытыусының, класташтарҙың уҡыуын тыңлау. Тулыһынса (дөрөҫ) уҡыу. Ижектәр йәки һүҙҙәрҙе дөрөҫ итеп талғын уҡыу. «Әлифба» дәреслеге менән эш. Һөйләмдәрҙе күсереп яҙыу ҡағиҙәләре. Тексты күсереп яҙыу (2 - 3 һөйләм). 3 - 4 хәрефтән торған һүҙҙәрҙе ишетеп |

| | | |
|---|---|---|
| | үҫтереү. «Һабантуй» иллюстрацияһы, В. А. Осееваның «Нимә еңелерәк?» әкиәте. | яҙыуҺөйләмдәрҙе тасуири уҡырға әйрәнеү (хәбәр итеү, һорау, өндәү). «Һабантуй» иллюстрацияһы, В.А.Осееваның «Нимә еңелерәк?» әкиәте буйынса телмәр үҫтереү. Халыҡ йолаларына, ғөрөф-ғәҙәттәренә һ.б. ҡыҙыҡһыныуы һәм ихтирам тәрбиәләү. Бармаҡ мускулдарын эшкәртеү, ҡул моторикаһын үҫтереү: штрихлау, буяу, хәреф элементтарын яҙыу. Һөйләмдәр (3 - 4 һүҙ), 3 - 4 һөйләмдән торған текст (12 - 15 һүҙ) күсереп яҙыу. |
| | Алфавиттың Дд-Тт, Бб-Пп, ВВ-Фф хәрефтәрен өйрәнеү. Өйрәнелгән хәрефтәрҙе нығытыу. Бер хәрефте икенсе хәреф менән алмаштырыу: һүҙ мәғәнәһен үҙгәртеү.Өйрәтеүсе диктант. Телмәр үҫтереү. «Әсәйемә (атайға) ярҙам итәм», «Беҙҙең ихатала», «Өфө - Башҡортостандың баш ҡалаһы» иллюстрациялары | Алфавиттың Бб-Пп, ВВ-Фф хәрефтәрен өйрәнеү. Өйрәнелгән хәрефтәрҙе нығытыу (Дд-Тт). Күҙәтеү, сағыштырыу һәм анализ: бер хәрефте икенсе хәреф менән алмаштырыу һәм унның мәғәнәһен үҙгәртеү (бай-һай, фил-һил). Һүҙҙәрҙе һуҙынҡы өнгә иғтибар йүнәлтеп уҡыу. Тексты «дөрөҫ», «аңлы» уҡыу критерийҙары буйынса баһалау. «Әсәйемә (атайға) ярҙам итәм», «Себештәр», «Өфө - Башҡортостандың баш ҡалаһы» һүрәттәре буйынса эш. Диалогик телмәрҙе үҫтереү. Бармаҡ мускулдарын эшләтеү, ҡул моторикаһын үҫтереү: штрихлау, буяу, хәреф элементтарын яҙыу. Һүҙҙә хәрефтәрҙе берләштереүҙе автоматлаштырыу. Өйрәнелгән хәрефтәр менән һүҙҙәрҙе ишетеп(диктант) яҙыу. |
| | Шш–Жж, Чч–Щщ, Хх, Цц хәрефтәре.<br>Башҡорт һүҙҙәрендә ҡалын айырыу билдәһе (ъ), нәҙек айырыу (ь) | Алфавиттағы Шш–Жж, Чч–Щщ, Хх, Цц һәм ҡалын айырыу (ъ), нәҙек айырыу (ь) билдәләрен өйрәнеү.Хәрефтәрҙең график сағылышын күҙәтеү. Хәреф элементтары яҙылышындағы оҡшашлыҡ һәм айырмалыҡтарҙы сағыштырыу. . Бармаҡ мускулдарын эшләтеү, ҡул |

| | | |
|---|---|---|
| | билдәһе.Башҡорт һәм рус телдәрендә яҙыуҙа ҡалын (ъ) һәм нәҙек (ь) айырыу билдәләрен ҡулланыу үҙенсәлектәре(танышыу маҡсатында).Хәреф элементтары яҙылышындағы оҡшашлыҡ.. Ш, ж, ч, щ, ц хәрефтәре менән үҙләштерелгән һүҙҙәр. Өйрәтеүсе диктант.Дөрөҫ итеп,аңлап,йүгерек уҡыу. Телмәр үҫтереү. «Мин тәбиғәтте яратам». С. Михалковтың «Ишәк һәм и ҡондоҙ» әкиәте. | моторикаһын үҫтереү: штрихлау, буяу, хәрефтәрҙе яҙыу.Рус телендәге [ш], [ж] (һәр ваҡыт ҡалын ) һәм [щ],[ч] (һәр ваҡыт нәҙек) өндәрен күҙәтеү. Һөйләү телмәрендә рус һәм башҡа телдәрҙән ингән (гараж, щи, жираф, чабан һ.б.) һүҙҙәрҙе ҡулланыу. Башҡорт һәм рус телдәрендә яҙыуҙа ҡалын (ъ) һәм нәҙек (ь) айырыу билдәләрен ҡулланыу үҙенсәлектәре н төшөнөү.Тыңлап (диктант) 2-3 юлдан торған һүҙҙәр һәм һөйләмдәр яҙыу. Дөрөҫ итеп,аңлап,йүгерек уҡырға өйрәнеү буйынса эш..Алфавиттың өйрәнгән хәрефтәрен нығытыу.Тексты талғын уҡыу буйынса оҫталыҡ һәм күнекмәләрҙе үҫтереү.Текстағы һөйләмдәрҙе уҡығанда тауышты.интонацияны дөрөҫ һайлау.Тәбиғәт күренештәрен күҙәтеү һәм «Мин тәбиғәтте яратам» һүрәте буйынса текст төҙөү. С. Михалковтың «Ишәк һәм и ҡондоҙ» әкиәтен анализлау (тема,геройҙар,асылы,йәғни,төп фекер) буйынса эш.Эргә - тирәндәге кешеләргә яҡшы мөнәсәбәт булдырыу. Яҡындарыңа һөйөү,йорт хайуандарына иғтибарлы ҡараш тәрбиәләү. |
| | Алфавит.<br>Әлифба байрамы. | Алфавит буйынса эш. Алфавитта хәрефтәрҙең бирелеү тәртибен төшөнөү. Алфавитты практикала ҡулланыу. Алфавиттың төрлө хәрефтәре менән һүҙҙәр һайлау. Алфавиттағы хәрефтәрҙең дөрөҫ яҙылышы. Хәрефтәрҙе каллиграфик нормалар буйынса тоташтырыу техникаһын төшөнөү. Һөйләмдә һүҙҙәрҙе айырым яҙырға өйрәнеү һәләтен автоматлаштырыу. |

| | | |
|---|---|---|
| | | Контроль һәм баһалау, хәрефтәрҙе дөрөҫ яҙыу һәм уларҙы бер-береһенә тоташтырыу оҫталыҡтарын үҫтереү. «Хуш, Әлифба!» байрамын ойоштороу. «Хәрефле аҡлан» күргәҙмәһен әҙерләү. Байрамға иң яҡшы ижади эштәр һайлап алыу. |
| Резерв –2 с. | | |
| **Систематик курс (34 с.)** | | |
| Тел тураһында дөйөм мәғлүмәттә р.Телмәр үҫтереү. (2 с.) | Телмәр һәм аралашыу. Тел - аралашыу сараһы. Диалог. Һөйләмдәр, текст күсереү. Телмәр үҫтереү. «Мин уҡый беләм!» тигән сюжетлы картина буйынса эш. | Халыҡтың төп аралашыу ҡоралы булараҡ телдең ролен аңлау. Туған теленде яратырға, дөрөҫ һөйләшергә өйрәнеү. Рус теле дәүләт теле булараҡ ихтирам итеү, уны яратып өйрәнеү. Тел аша мәктәптә белем алыу әһәмиәтен төшөнөү, мәғлүмәт табырға өйрәнеү. Уҡытыусы етәкселегендә уҡыу диалогында ҡатнашыу. Уҡытыусы һорауҙарына яуаптар биреү. Ябай һорауҙар төҙөү һәм уны класташтарыуа еткереү. Бирелгән һорауға яуапты мимика, ишара, хуплау һүҙҙәре ярҙамында тыңлау әңгәмәсенең яуабына ризалыҡ күрһәтеү.Дәреслектәге иллюстрация буйынса һөйләмдәр , текст төҙөү. Тексты,һөйләмдәрҙе дөрөҫ яҙып алыу. Халыҡ аралашыуында һүҙҙең, телмәрҙең, туған телде белеүҙең ролен төшөнөү. |
| Фонетика. Графика. Телмәр үҫтереү (8 с.) | Алфавит. Алфавит функцияһы. Хәрефтәрҙең атамаһы. Алфавиттағы хәрефтәр тәртибе. Журналда класс исемлеге. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Йомшаҡ һәм ҡалын һуҙынҡы өндәр. Башҡорт һәм рус телдәрендә тартынҡылар (сағыштырыу, ҡаршы ҡуйыу). Өндәр | Алфавиттың функцияһын аңлау. Хәреф атамаларын өйрәнеү. Алфавитта хәрефтәрҙең билдәле тәртиптә бирелгәнен төшөнөү. «Алфавит иле» сюжет һүрәте буйынса эш. Һорауҙарға яуаптар, фекер алышыуҙар: «йорттарҙа» хәрефтәр ниндәй принцип буйынса урынлаштырылған? Хәреф менән өндө айыра белеү. Өндәр, хәрефтәр тураһында белемде нығытыу, нәҙек [ә], [ө], [ү], [э] һәм ҡалын [а], [о],[у],[ы] һуҙынҡыларҙы айырыу;4-5 өндән торған һүҙҙең өн моделен төҙөү; уны һүҙҙең хәрефле яҙмаһына үҙгәртеү. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр таблицаһы менән танышыу. Башҡорт һәм рус телдәре алфавитындағы бер иш хәрефтәр. Һүҙ өндәрен ишетеп айырыу һәм әйтә белеү. Бер |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | таблицаһы. Һөйләмде, текстарҙы күсереп яҙыу алгоритмы. Телмәр үҫтереү. «Алфавит илендә» сюжет картинаһы. | | хәреф менән айырылған ҡыҫҡа һүҙҙәрҙе сағыштырыу. Һүҙҙәге өндәрҙе күҙәтеү, сағыштырыу, ҡаршы ҡуйыу һәм анализлау. Һығымталар яһау. Бәләкәй төркөмдәрҙә уҡыу объекттарын (өн/хәреф) мини-тикшереү буйынса эш. Бирелгән алгоритм буйынса һөйләмдәрҙе, текстарҙы күсереп яҙыу. Төрлө тел ситуацияларында тиҫтерҙәрең менән хеҙмәттәшлек итә белеү оҫталыҡтарын үҫтереү.Дәреслектә бирелгән сюжетлы һүрәт буйынса текст төҙөү. |
| Синтаксис.<br>Лексика.<br>Телмәр үҫтереү<br>(5 с.) | Һөйләм – тел берәмеге. Хәбәр, һорау һөйләм Һөйләмдең төп мәғәнәүи өлөшө. Ярҙамсы һүҙҙәрҙе һөйләмдә ҡулланыу. Мәғәнәүи һорауҙар ярҙамында һүҙҙәргә һәм һүҙбәйләнештәргә һорауҙар ҡуйыу. Һөйләмдең график схемаһы. Телмәр үҫтереү. Дәреслектәге иллюстрациялар, текстар. | | Һөйләмде дөрөҫ төҙөү. Мәғәнәүи һорауҙар ярҙамында һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр араһында бәйләнеш булдырыу Һөйләмдең мәғәнәүи төп өлөшөн табыу. Яҙыу телмәрендә (һөйләмдә) (һәм, менән; ғына-ҡына, генә-кенә) ярҙамсы һүҙҙәрен ҡулланыу. Ишетеп һөйләмдең төрөн (хәбәр, һорау) асыҡлау, һөйләмдәге интонацияны аңлау, уны уҡытыусы артында ҡабатлау һәм аңлы уҡыуҙы автоматлаштырыу. Һүрәттәр,һүҙҙәр йыйылмаһы,күҙәтеүҙәр буйынса (3 - 5 һүҙҙән) һөйләмдәр һәм текстар (4 - 5 һөйләмдән) төҙөү. Аңлатмалы һүҙлек менән танышыу : таныш булмаған һүҙҙе билдәләү,айырып алыу һәм һүҙҙең мәғәнәһен аңлау. Һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе ишетеп яҙыу(диктант).Әңгәмә (диалог), дәреслектәге иллюстрациялар буйынса текст төҙөү. |
| Морфология. Телмәр үҫтереү<br>(8 с) | Һүҙ – тел берәмеге. Предметтың атамаһын, предметтың билдәһен, предметтың эш-хәрәкәтен белдереүсе һүҙҙәр (ҡабатлау). Ярҙамсы һүҙҙәр (һәм, менән; ғына-ҡына, генә-кенә). Телмәр үҫтереү. Дәреслек иллюстрациялары, текстар буйынса эш. | | Һүҙҙе тел берәмеге буларак аңлау. Үҙ аллы ( предметтың атамаһы, предмет билдәһе, предметтың эш-хәрәкәтен белдергән) һәм ярҙамсы һүҙҙәрҙе (һәм, менән; ғына-ҡына, генә-кенә) ишетеп айыра белеү;уларҙы телдән һәм яҙма телмәрҙә урынлы ҡулланыу; текста тейешле һыҙыҡтар менән билдәләү. Бирелгән һүҙҙәрҙең мәғәнәһе буйынса төркөмдәргә (предмет атамаһы, предмет билдәһе, предметтың эш-хәрәкәте) бүленеше һәм был һүҙҙәр төркөмөнөң берҙәм график-символик схема менән билдәләнеүе. Һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе, текстарҙы каллиграфик ҡағиҙәләрҙе үтәп яҙыу.Ҡыҫҡа текстар төҙөү өсөн дәреслектең |

| | | |
|---|---|---|
| | | иллюстрацияларын ҡулланыу |
| Орфоэпия. Телмәр үҫтереү (2 с.) | Һүҙҙәрҙә өндәрҙе һәм өн ҡушылмаларын дөрөҫ итеп әйтеү. Башҡорт һүҙҙәрендә баҫымдың специфик үҙенсәлеге. Ҡалын [а], [о], [у], [ы] йәки тик нәҙек[ә], [ө], [ү], [и], [э] һуҙынҡы өндәре/хәрефтәренән торған һүҙҙәр, сингармонизм законы(терминһыҙ,танышыу маҡсатында). Телмәр үҫтереү: дәреслектең иллюстрациялары, текстар. | Специфик әйтелешле ҡалын [а], [о], [у], [ы] йәки тик нәҙек[ә], [ө], [ү], [и], [э] һуҙынҡы өндәре/хәрефтәренән торған һүҙҙәрҙе тыңлап билдәләй белеү. Ҙур булмаған тикшеренеү эше: башҡорт һәм рус телендәге һүҙҙәре сағыштырыу, ҡаршы ҡуйыу (мәл – [мәл], мял – [м'ал]) һәм күҙәтеү буйынса туған телдә һығымта сығарыу.Һүҙҙе тыңлау һәм баҫымлы ижекте билдәләү (һуҙынҡы өндө табыу); башҡорт һүҙендәге баҫымдың башлыса һуңғы ижеккә (һуҙынҡы өнгә) төшөүен аңлау. Күсереп йәки диктант яҙыу. Әңгәмә (дискуссия), дәреслектәге иллюстрация буйынса текст төҙөү. |
| Орфограмма. Пунктуация. Телмәр үҫтереү (5 с.) | Һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы: һүҙ хәрефтәрен дөрөҫ тоташтырыу, һүҙҙәрҙе айырым яҙыу. Һөйләм башында баш хәреф. Исемемдәге һәм фамилиямдағы баш хәреф. . Һүҙҙе юлдан-юлға күсереү. Һөйләм аҙағында тыныш билдәләре (нөктә, һорау билдәһе). Телмәр үҫтереү: дәреслектәге иллюстрациялар, текстар. | Һүҙ хәрефтәрен каллиграфик нормалар буйынса дөрөҫ тоташтырыу. Һүҙҙе һөйләмдә айырым яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ яҙыу (һөйләм башындағы баш хәреф). Исемемдәге һәм фамилиямдағы баш хәреф . Хәрефһеҙ график саралар: һүҙҙәр араһындағы бушлыҡ, күсереү билдәһен ҡулланыу. Һөйләм аҙағында тыныш билдәләрен (нөктә, һорау билдәһе) дөрөҫ ҡуйыу. Һүҙ, һөйләм, текст яҙыуҙы контолдә тотоу һәм баһалау. Дәреслектән, таҡтанан күсереп яҙған текстағы хаталарҙы тикшереү һәм төҙәтеү. Хәрефтәрҙе дөрөҫ яҙыу, һүҙ хәрефтәрен дөрөҫ тоташтырыу һәм һөйләмдә һүҙҙәрҙе айырым яҙыу оҫталығын автоматлаштырыу. Ҡыҫҡа һүҙҙәр менән диктант яҙыу (өйрәтеү диктанты,15-20 һүҙ). Дәреслектәге иллюстрациялар буйынса эш. |
| Тексты контроль күсереү/контроль | | Дәреслектән, таҡтанан тексты күсереп алыу (контроль |

| | |
|---|---|
| диктант.<br>(2 с) | диктант). Был эште түбәндәге критерийҙар буйынса башҡарыу: 1) һүҙ хәрефтәрен һәм хәреф ҡушылмаларын каллиграфик нормалар буйынса дөрөҫ яҙыу; 2) һүҙҙәр араһындағы бушлыҡ; 3)баш хәрефле һөйләм; 4) һөйләм аҙағында нөктә йәки һорау билдәһе ҡуйылышы. |
| Резерв – 2 с. | |

**2 се класс – 68 с.**

| Бүлек | Программа йөкмәткеһе | Уҡыусыларҙың эшмәкәрлеге төрҙәре |
|---|---|---|
| 1-се класта үтелгән уҡыу материалын ҡабатлау.<br>Телмәр үҫтереү<br>(4 с.) | 1 – се кластағы уҡыу материалын ҡабатлау. Башҡорт алфавитындағы өндәр һәм хәрефтәр системаһы. һөйләм, һүҙ. Хәрефтәр, һүҙҙәрҙе яҙыу буйынса каллиграфик ҡағиҙәләр. Тексты күсереп яҙыу. Телмәр үҫтереү «Һаумы, мәктәп!» | 1 – се кластағы уҡыу материалын ҡабатлау. Өндәр таблицаһы һәм алфавит менән эшләү. Алфавит хәрефтәрен дөрөҫ әйтеү өҫтөндә эш. Һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе таҡтанан, дәреслектән күсереп яҙыу. Хәрефтәр яҙыуға каллиграфик талаптарҙы ҡабатлау: хәреф элементтарын һәм хәрефтәрҙе бер-береһе менән дөрөҫ тоташтырыу. Һөйләмдең һәр һүҙен айырым яҙыу. Каникулдарҙағы йәйге ял (яңылыҡтар, проблемалар, ваҡиғалар) тураһында әңгәмә (дискуссия). Дәреслектәге иллюстрация буйынса телмәр үҫтереү |
| Тел.Телмәр.Телмәр үҫтереү<br>(7 с.) | Телмәр һәм аралашыу. Тел - төп аралашыу сараһы. Диалог. Аралашыу этикеты. «Телмәр, тел» проект эше. Телмәр үҫтереү | Телде халыҡтың төп аралашыу сараһы булараҡ төшөнөү. Төрлө уҡыу (тел) ситуацияларында диалогта ҡатнашыу.Уҡыу процесындағы партнерҙар менән мәҙәни аралашыу оҫталығына өйрәнә башлау. Диалогта ҡатнашыу. Уҡытыусыға һорау, үтенес менән мөрәжәғәт итеү. Контекстан |

| | | |
|---|---|---|
| | | сығып йәки аңлатмалы һүҙлек буйынса һүҙҙең мәғәнәһен билдәләү. Проект эшмәкәрлеге буйынса эште планлаштырыу. Һүрәт, дәреслектәге текст материалдары буйынса парлап, төркөмләп эшләү |
| Фонетика. Графика.<br>Орфоэпия<br>Лексика<br>Телмәр үҫтереү<br>(21 с.) | Алфавит. Хәреф. Өн. Һүҙҙә хәрефтең мәғәнә үҙгәртеү үҙенсәлеге. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр.Нәҙек һуҙынҡылар [ә], [ө], [ү], [е](һүҙ уртаһында һәм аҙағында).Ҡалын һуҙынҡылар [а], [о], [у], [ы] (сингармонизм законы ( термин ҡулланылмай). Һүҙ башында һәм уртаһында [йә], [йө], [йү], [йы], [йо] дифтонгылары. Һүҙ башында ике өндө белдергән е, ю,я хәрефтәре (танышыу маҡсатында) . Һүҙҙәрҙә [ғ] – [ҡ], [г] – [к], [б] – [п]. тартынҡыларының сиратлашыу күренеше. Башҡорт алфавиты. Телмәр үҫтереү. Дәреслектәге һүрәттәр,текст материалдары. | Алфавиттың практик әһәмиәтен төшөнөү. Башҡорт һәм рус телдәре алфавиты хәрефтәренең оҡшаш һәм айырмалы яҡтарын күҙәтеү һәм асыҡлау. Хәреф менән өндөң айырмаһын, оҡшашлығын асыҡлау. Хәрефтең мәғәнә үҙгәртеү үҙенсәлегене күҙәтеү һәм аңлау. . Башҡорт телендә сингармонизм законын күҙәтеү ( термин ҡулланылмай). Өндәрҙе нәҙек һуҙынҡыларға ([ә], [ө], [ү], [е] (һүҙ уртаһында һәм аҙағында) һәм ҡалын һуҙынҡыларға ([а], [о], [у], [ы]) айырырға өйрәнеү. Башҡорт телендә [ғ] – [ҡ], [г] – [к], [б] – [п] тартынҡыларының сиратлашыу күренешен күҙәтеү һәм һығымта яһау. Һүҙ башында һәм уртаһында [йә], [йө], [йү], [йы], [йо] дифтонгыларын күҙәтеү һәм дөрөҫ яҙырға өйрәнеү. Һүҙ башында ике өндө белдергән е, ю,я хәрефтәре килеү осраҡтарын күҙәтеү (танышыу маҡсатында). Тексты күсереп, диктант итеп яҙыу. Текст йөкмәткеһенән сығып йәки аңлатмалы һүҙлек буйынса һүҙҙең мәғәнәһенә төшөнөү. Дәреслек иллюстрациялары, материалдары нигеҙендә текст төҙөү, фекер алышыу |
| Синтаксис.<br>Лексика.<br>Телмәр үҫтереү | Һөйләм һәм һүҙ. Һөйләм. Һүҙбәйләнеш. Һөйләмдәрҙә һүҙ тәртибе. Һөйләмдәр төҙөү. Хәбәр һәм һорау һөйләм. Һөйләм аҙағында тыныш | Һөйләмдәрҙе төҙөгәндә уның структура үҙенсәлеген иҫәпкә алыу (эш-хәрәкәтте белдергән һүҙ һөйләм аҙағына ҡуйыла)<br>Сюжетлы һүрәттәр, дәреслек материалдары |

| | | |
|---|---|---|
| (8 с.) | билдәләре (нөктә, һорау билдәһе). Телмәр үҫтереү. Һүрәттәр, дәреслектең текст материалдары | буйынса һөйләмдәр (3 - 5 һүҙ, 3 - 5 һөйләм), ҙур булмағанн текст төҙөү. Уҡыу объекттарын (һүҙ, һөйләм), тәбиғәт күренештәрен күҙәтергә һәм күргәндәрҙе һөйләргә өйрәнеү. Контекст йәки аңлатмалы һүҙлек буйынса һүҙҙең мәғәнәһен асыҡларға; телмәр ағымынан кәрәкле мәғлүмәтте айырып алырға һәм ҡулланырға өйрәнеү. Эште башҡарыу шарттарын аныҡлау маҡсатында һорауҙар биреү. Һөйләм төрҙәрен (хәбәр,һорау) билдәләү һәм дөрөҫ интонация менән уҡыу.Һөйләмдәрҙе (тексты) диктант итеп һәм тексты күсереп яҙыу. Дәреслектәге иллюстрациялар менән эш. |
| Һүҙ составы.<br>Лексика.<br>Телмәр үҫтереү<br>(5 с.) | Һүҙ – телмәр берәмеге. Тамыр һәм ялғау. Тамыр – һүҙҙең төп мәғәнәүи өлөшө. Тамырҙаш һүҙҙәр.. Һөйләмдә ялғауҙар ярҙамында һүҙҙәр бәйләнеше.<br>Телмәр үҫтереү. Һүрәттәр, дәреслектең текст материалдары. | Һүҙҙе тел берәмеге булараҡ ҡабул итеү. Телмәрҙәге синонимдар, антонимдарҙың ҡулланышын күҙәтеү. Һүҙгә ялғау ҡушыу процесын күҙәтеү. Һүҙҙе составы буйынса анализлау (ябай осраҡтар). һүҙҙең тамыры һүҙҙең төп мәғәнәүи өлөшө булыуына төшөнөү. Тамырҙаш һүҙҙәрҙе күҙәтеү. Һүҙҙәрҙә тамырҙы һәм ялғауҙарҙы айырып күрһәтеү (ябай осраҡтар). һөйләмдә ялғауҙарҙың ролен аңлау. Текст йәки аңлатмалы һүҙлек буйынса һүҙҙең мәғәнәһен билдәләү. Һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе диктант итеп һәм күсереп яҙыу. Һүрәттең йөкмәткеһен, асылын билдәләү, фекер алышыу |
| Морфология<br>Лексика.<br>Телмәр үҫтереү<br>(10 с.) | Предметты белдергән һүҙҙәр. Предметтың билдәһен белдергәнн һүҙҙәр. Предметтың эш-хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр. Уларҙың телмәрҙә ҡулланышы. | Предметтың атамаһын аңлатҡан һүҙҙәрҙе айырырға һәм уларға «кем?»,«нимә?» һорауҙары ҡуйырға өйрәнеү. Предметтың билдәһен аңлатҡан һүҙҙәрҙе айырыу һәм «ниндәй?» һорауына яуап булыуына төшөнөү. Предметтың эш-хәрәкәтен аңлатҡан һүҙҙәрҙе танырға күнегеү һәм «ни |

| | | |
|---|---|---|
| | Ярҙамсы һүҙҙәр (һәм, менән; ҡына-кенә, ғына-генә).<br>Телмәр үҫтереү.<br>Һүрәттәр, дәреслектәге текст материалдары. | эшләй?» һорауына яуап булыуын билдәләү. Уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. Ярҙамсы һүҙҙәрҙе (һәм, менән, ҡына-кенә, ғына-генә) таныу, уларҙы яҙма һәм һөйләү телмәрендә урынлы ҡулланыу. Диктант яҙыу. Тексты күсереп яҙыу.Һүҙҙең мәғәнәһен текс йөкмәткеһенә йә орфографик һүҙлеккә таянып асыҡлау. Дәреслек һүрәттәре нигеҙендә телмәр үҫтереү.Уҡыу диалогында әүҙем ҡатнашыу. Теге йәки был эште башҡарыу буйынса һорауҙар тыуған осраҡта уҡытыусыға һорау менән мөрәжәғәт итеү һ.б. |
| Орфография.<br>Орфоэпия.<br>Лексика.<br>Телмәр үҫтереү<br>(7 с.) | Һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы: Һөйләмдең беренсе һүҙенең, яңғыҙлыҡ исемдәрҙең (кеше исемдәре, хайуан ҡушаматтары) баш хәрефтән яҙылышы. Вв хәрефе ( [ү] – [у] өнө); [ү] – [у] өндәре һүҙ уртаһында һәм аҙағында. Һүҙҙе юлдан-юлға күсереү. Башҡорт телендә баҫым үҙенсәлектәре. Телмәр үҫтереү. Һүрәттәр, дәреслектәге текст материалдары | Өйрәнелгән дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен ҡулланыу. Орфограммалы һүҙҙәрҙе табып, аҫтына һыҙырға өйрәнеү. Үҙең төҙөгән һәм тәҡдим ителгән текстарҙы тикшергәндә контроль һәм үҙ контроль күнекмәләренә эйә булыу. Диктант яҙыу (6 - 7 юл, 35 - 40 һүҙ). Башҡорт телендә баҫым үҙенсәлектәрен төшөнөү: ҡағиҙә буларак, баҫым һуңғы ижеккә төшә һәм ялғау ҡушылғанда һуңғы ижеккә күсә барыу үҙенсәлеген үҙләштереү. Һүҙҙең мәғәнәһен текст йәки аңлатмалы һүҙлек буйынса билдәләү.Бәйләнешле телмәр үҫтереү буйынса дәреслектә бирелгән Һүрәттәр, текст материалдары буйынса эшләү. |
| Тикшереү эштәре (1–4-се синыфтар)<br>(4 с.) | Контроль эш. Эште анализлау.<br>Изложение. Эште анализлау | Контроль диктант, изложение яҙыу |
| Резерв (2 с.) | | |

**3-сө класс – 68 с.**

| Бүлек | Программа йөкмәткеһе | Уҡыусыларҙың эшмәкәрлек төрҙәре |
|---|---|---|
| 2-се кластың уҡыу материалдарын ҡабатлау (3 с.) | Ҡабатлау. Өн һәм хәрефтәр системаһы. Башҡорт өндәренә һәм хәрефтәренә хас үҙенсәлектәр. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр таблицаһы. Предметтың атамаһын, уның эш-хәрәкәтен, предмет билдәһен белдергән һүҙҙәр. Текст яҙыу. (күсереп яҙыу, диктант). Телмәр үҫтереү. Дәреслектәге иллюстрациялар. | Бер хәрефте (өндө) икенсе хәреф (өн) менән алмаштырғанда һүҙ мәғәнәһенең үҙгәреүен күҙәтеү һәм һығымта яһап дөйөмләштереү. Нәҙек / ҡалынлығы буйынса парлы һуҙынҡыларҙың таблицаһын ҡарау [ә] – [а], [ө] – [о], [ү] – [у]. Башҡорт телендәге үҙенсәлекле тел күренешен күҙәтеү (нығытыу): һүҙҙә өндәрҙең сиратлашыуы [ғ]– [ҡ], [г]– [к], [б]–[п]. Текстарҙы яҙыу (күсереп яҙыу, диктант). Балаларҙың йәйге ялы, уйындары тураһында әңгәмә. Дәреслектәге иллюстрациялар буйынса эш. |
| Тел тураһында дөйөм мәғлүмәттәр. Лексика. Телмәр үҫеше (4 с.) | Рус теле - Рәсәй Федерацияһында дәүләт теле. Туған (башҡорт) тел - Башҡортостан Республикаһының икенсе дәүләт теле. Тел - аралашыу сараһы. Диалог. Монолог. Телмәр үҫтереү. Дәреслектәге һүрәттәр, диалог, монолог текстары. | Рәсәй Федерацияһында дәүләт теле булараҡ рус теленең, Башҡортостан Республикаһының икенсе дәүләт теле булараҡ туған (башҡорт) теленең әһәмиәтен аңлау. Белем алыу процесында, дәрестән тыш ваҡытта һәм өйҙә ике телде лә практикала ҡулланыу (аралашыу). Рәсәй халыҡтарының тел мираҫына ихтирам. Бирелгән темаларға, ситуацияларға монолог һәм диалог төҙөү. Текст йөкмәткеһенән сығып йәки аңлатмалы һүҙлек буйынса һүҙҙең мәғәнәһен билдәләү. |
| Фонетика. Графика. Лексика. Телмәр үҫтереү (8 с.) | Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр (ҡабатлау). Яңғыраулыҡ һәм һаңғырау, йомшаҡ һәм ҡалын тартынҡылар. Башҡорт телендәге үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә яңғырау һәм | Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙе ишетеп таныу. Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә парлы тартынҡы өндәрҙең яңғырау һәм һаңғырау булыуын айыра белеү. Һүҙлектәр, белешмәләр һ.б. менән эшләгәндә алфавит ҡулланыу. Алфавитты |

| | | |
|---|---|---|
| | һаңғырау ҡуш тартынҡылар. Алфавит функцияһы. Телмәр үҫтереү.Иллюстрациялар, дәреслектәге текст материалдары | ҡулланыуҙың башҡа мөмкинлектәрен эҙләү |
| Орфоэпия. Телмәр үҫтереү<br>(4 с.) | Башҡорт һүҙҙәрендә өндәрҙең әйтелеш һәм ярашыу нормалары. Һүҙҙәрҙә заман башҡорт әҙәби теле нормаларына ярашлы баҫым (ҡабатлау). Һүҙ башында *в хәрефе* менән башланған һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтеү үҙенсәлектәре.<br>Практик мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә орфоэпик һүҙлекте ҡулланыу. «Орфоэпик һүҙлек -минең ярҙамсым» проект эше. Телмәр үҫтереү. Дәреслек иллюстрациялары. | Нәҙек ([ә], [ө], [ү], [и], [э]) һәм ҡалын ([а], [о], [у], [ы]) һуҙынҡы өндәре булған төп башҡорт һүҙҙәрендә өндәрҙе һәм өн ҡушылмаларын дөрөҫ итеп әйтеү. Заман башҡорт әҙәби теле нормаларына ярашлы баҫым ҡуйыу. Һүҙ башында *в хәрефе* менән башланған һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтеү үҙенсәлектәре: ваҡыт –[уаҡыт], Вәсилә – [үәсилә] һ.б.Практик мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә орфоэпик һүҙлек файҙаланыу.Проект эшмәкәрлеге буйынса эш планлаштырыу. Һүҙҙә орфограммаларҙың дөрөҫ яҙылыуына аңлатма биреп яҙыу. |
| Һүҙ составы. Лексика. Телмәр үҫеше<br>(7 с.) | Ҡабатлау: тамыр - һүҙҙең мәғәнәүи төп өлөшө. Һүҙҙең ялғауы. Тамырҙаш һүҙҙәр. Форма яһаусы һәм һүҙ үҙгәртеүсе ялғауҙар. Телмәр үҫтереү. Һүрәттәр, дәреслектәге текст материалдары. | Һүҙ тамырын билдәләү. Бирелгән һүҙгә бер тамырҙан булған (тамырҙаш) һүҙҙәр һайлау. Ялғау - һүҙҙең үҙгәреүсән өлөшө булыуын аңлау.. Тексты дөрөҫ итеп күсереп яҙыу. Дәреслектәге иллюстрация,текст материалдарына таянып һөйләү һәм яҙма телмәрҙе үҫтереү |
| Морфология. Лексика. Телмәр үҫтереү<br>(12 с.) | Һүҙ төркөмдәре. Исем: дөйөм мәғәнәһе, һорауҙары, телмәрҙә ҡуланылышы. Берлектәге һәм күплектәге исемдәр. Йәнле һәм йәнһеҙ предметтарҙы белдергән исемдәр.Был төр исемдәрҙең рус телендәге һүҙҙәрҙән айырмаһы. Исемдәрҙең эйәлек категорияһы. | Исемдең мәғәнәһен аңлау. Һорау ҡуйыу («кем?», «нимә?»). Телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу. Исемде һан менән үҙгәртеү (берлектә һәм күплектә). Исемдәрҙе йәнле һәм йәнһеҙ предметтарҙы сағылдырыу күҙлегенән төркөмләү. Исемдең эйәлек категорияһын һүҙҙәр ярҙамында сағылдырыу: 1) минеке (минең), һинеке (һинең), беҙҙеке (беҙҙең); 2) исемде һүҙ тамырына -ныҡы, - |

| | | |
|---|---|---|
| | Исемдең эйәлек категорияһын һүҙҙәр ярҙамында сағылдырыу: 1) минеке (минең), һинеке (һинең), беҙҙеке (беҙҙең); 2) һүҙ тамырына -нығы, -неке, -ноҡо, -нөкө, -дыҡы, -деке, -доҡо, -дөкө, -тыҡы, -теке, -тоҡо, -төкө, -ҙыҡы, -ҙеке, -ҙоҡо, -ҙөкө ялғауҙарын ҡушыу юлы менән яһау. Телмәр үҫтереү. Иллюстрациялар, дәреслектең текст материалдары | неке, -ноҡо, -нөкө, -дыҡы, -деке, -доҡо, -дөкө, -тыҡы, -теке, -тоҡо, -төкө, -ҙыҡы, -ҙеке, -ҙоҡо, -ҙөкө ялғауҙарын ҡушыу юлы менән яһау. Тексты күсереп яҙыу. Текста исемдәрҙең ялғауҙарын табып билдәләү. Тексты диктант итеп яҙыу. |
| | Сифат. Дөйөм мәғәнәһе, һорауҙары, телмәрҙә ҡулланышы. Төрҙәре: төп сифат (төп): ҡыҙыл таҫма; 2) шартлы сифат: яҙғы ел. Исем менән сифаттың мәғәнәүи бәйләнеше. Телмәр үҫтереү. Иллюстрациялар, дәреслектең текст материалдары | Сифаттың үҙ аллы һүҙ төркөмө икәнен аңлау. Уның предметтың билдәһен белдереүенә төшөнөү. Сифатҡа һорау ҡуя белеү. Һөйләү һәм яҙма телмәрҙә ҡулланыу. Исем менән сифаттың мәғәнәүи бәйләнешен билдәләү.Бәйләнешле телмәр үҫтереү өҫтөндә эш: дәреслектәге иллюстрацияларға,текст материалдарына нигеҙләнеп текстар төҙөү. |
| | Ҡылым. Дөйөм мәғәнәһе, һорауҙар, телмәрҙә ҡулланыу. Ҡылымдың һан,зат менән үҙгәреше. Телмәр үҫтереү. Иллюстрациялар, дәреслектең текст материалдары | Ҡылым үҙ аллы һүҙ төркөмө булыуына төшөнөү. Ҡылымға хас булған үҙенсәлектәрҙе күҙәтеү, аңлау. Ҡылым һөйләмдәге тотҡан урыны. Телмәрҙә ҡылымды дөрөҫ ҡулланыу. Исем менән ҡылым һүҙбәйләнештәрен (мәғәнәүи бәйләнеш) эҙләү һәм билдәләү. Бәйләнешле телмәрҙе үҫтереү буйынса эш: текстарҙы иллюстрацияларға таянып төҙөү, дәреслектең текстарын әҙерләү. |
| Синтаксис. Лексика. Телмәр үҫтереү<br>(10 с.) | Һөйләм. Һөйләм һүҙҙәре араһындағы синтаксик бәйләнеште күҙәтеү, билдәләү.Һөйләмдең баш киҫәктәре – эйә,хәбәр; һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре(ҡабатлау).Йыйнаҡ | Тамамланған фекерҙе белдергән һәм бер-береһе менән бәйле һүҙҙәр сылбыры булараҡ һөйләмдең төҙөк бер конструкция булыуына төшөнөү. Һорауҙар ярҙамында һөйләм эсендәге һүҙҙәр араһындағы синтаксик бәйләнеште |

| | | |
|---|---|---|
| | һәм тарҡау һөйләмдәр.Һөйләмдәге тиң киҫәктәрҙе күҙәтеү. Телмәр үҫтереү. Иллюстрациялар, дәреслектәге текст материалдары. | асыҡлау. Һөйләмдең баш киҫәктәрен (эйә,хәбәр), эйәрсән киҫәктәрен (тултырыусы,аныҡлаусы,хәл) ҡабатлау.).Йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәрҙе айырырға өйрәнеү. Һөйләмдәге тиң киҫәктәрҙе күҙәтеү. Телмәр үҫтереү. Иллюстрациялар, дәреслектәге текст материалдары.Тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе,текстарҙы күсереп яҙыу. Дискуссияла (әңгәмәлә) ҡатнашыу, дәреслектәге һүрәт буйынса текстар төҙөү. |
| Орфография. Пунктуация. Телмәр үҫтереү<br>(12 с. ) | Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре. Пунктуация. Орфограммаларҙы тикшереү ысулдары. Исемдәрҙә, фамилияларҙа, хайуандарҙың ҡушаматтарында, ҡалаларҙың, ауылдарҙың географик атамаларында һ.б. баш хәрефтәр (ҡабатлау). Китап, газета, журналдарҙың исемдәрен баш хәрефтән яҙыу. Ярҙамсы һүҙҙәрҙең айырым яҙылышы (*һәм, менән; ғына-ҡына, генә-кенә;дә-да,ҙә-ҙа, лә-ла, тә-та.* Ике өн белдергән *(е,ё, ю, я)* хәрефле һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы. Ҡуш тартынҡылары булған ; һүҙҙәрҙең яҙылышы. Тамырында тик о-ө һуҙынҡылары ғына булған *(өкө – өкөнөң, һоло – һолоноң)* һүҙҙәрҙең ялғауҙарының яҙылышы. Һүҙ башында *Вв* ( [үе] , [уы] өнө: *ваҡыт*– [уаҡыт], *Вәсилә* –[үәсилә] һ.б.. Диктант. Изложение.<br>Телмәр үҫтереү. Һүрәттәр, дәреслектең текст материалдары | Һөйләмдең, текстың Орфографик хата барлыҡҡа килеү ихтималлығын аңлау күнекмәһен булдырыу, Орфографик мәсьәләләрҙе хәл итеү ысулдарын табыу, ҡулланыу.Үҙең төҙөгән һәм әҙер текстарҙы тикшереүҙә контроль һәм үҙ контроль..Айырым һүҙҙәрҙе яҙыуҙы асыҡлау өсөн орфография һүҙлеген ҡулланыу. Һөйләмдәр, текстар яҙғанда тыныш билдәләрен дөрөҫ ҡуйыу. Исемдәрҙе, фамилияларҙы, хайуандарҙың ҡушаматтарын, ҡалаларҙың, ауылдарҙың, йылға, күл, тауҙарҙың географик атамаларын дөрөҫ яҙырға күнегеү. Китап, газета-журнал атамаларының исемдәрен грамоталы яҙырға өйрәнеү. Башҡорт телендә ҡулланылышҡа ингән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышын күҙәтеү һәм дөрөҫ яҙырға күнегеү. Ярҙамсы һүҙҙәрҙе (*һәм, менән; ғына-ҡына, генә-кенә;дә-да,ҙә-ҙа, лә-ла, тә-та)* һөйләү һәм яҙма телмәрҙә урынлы ҡулланыу, дөрөҫ яҙыу. Ике өн белдергән *е,ё, ю, я* хәрефле һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышын өйрәнеү. Ҡуш тартынҡылы һүҙҙәрҙе күҙәтеү, анализлау һәм һығымта яһау. Уларҙы ҡағиҙәгә ярашлы яҙырға күнегеү. Тамыры тик о-ө һуҙынҡыларынан ғына торған һүҙҙәрҙең *(өкө –өкөнөң, һоло – һолоноң).* Ялғауҙарының үҙенсәлектәрен өйрәнеү. Һ.б. Диктант яҙыу (диктанттың төрлө төрҙәре). 6-7 һорауға яҙма рәүештә яуап биреү. Башҡарылған эштәр кимәлен анализлау. Иллюстрациялар, текст материалдары буйынса диалог (дискуссиялар) |

| | | |
|---|---|---|
| | | ойоштороу |
| Тикшереү эштәре (1-4-се сирек) (4 с.) | Контроль диктант (55-60 һүҙ). Эште анализлау. изложение, инша (60-65 һүҙ). Эште анализлау | Контроль диктант яҙыу, изложение, инша.Анализ. Белем, оҫталыҡ һәм күнекмәләр кимәлен үҙ аллы баһалау |
| Резерв (4 с.) | | |

**4- се класс – 68 с.**

| Бүлек | Программа йөкмәткеһе | Уҡыусыларҙың эшмәкәрлек төрҙәре |
|---|---|---|
| Синтаксис. Лексика. (3-сө класта үткәндәрҙе ҡабатлау). Телмәр үҫтереү (2 с.) | Ҡабатлау:Һөйләм, һөйләмдәге һүҙҙәр араһында бәйләнеш; һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре. Йыйнаҡ һәм таркау һөйләмдәр. Телмәр үҫтереү. Дәреслектәге иллюстрация буйынса эш. Балаларҙың йәйге каникулдары тураһында «Һаумы мәктәп!», «Йәйге каникулдар» темаһына иншалар, ижади эштәр | Йәйге каникулдар тураһында әңгәмәлә, диалогта ҡатнашыу. Йәйге каникул тураһында инша (дәреслектән әҙер әҫәрҙәрҙе), көндәлек яҙмаларын уҡыу. Балаларҙың йәйге каникулдар ваҡытында ял итеү, сәйәхәт итеүе тураһында фекер алышыу. 3-сө класта өйрәнелгән темалар буйынса белемдәрҙе нығытыу, ҡабатлау маҡсатында иншалар менән танышыу һәм анализлау. Текст төҙөү. Тексты күсереп яҙыу. Һүрәттәр, дәреслек текстары менән телмәр үҫтереү буйынса эш. |
| Тел тураһында дөйөм мәғлүмәттәр (1 с.) | Рәсәй Федерацияһы, шул иҫәптән Башҡортостан Республикаһы территорияһында ла, телдәрҙең һәм мәҙәниәттәрҙең күп төрлөлөгө. Туған (башҡорт) тел - аралашыу сараһы, рухи-әхлаҡи үҫеш сығанағы | Рәсәй Федерацияһы, шул иҫәптән Башҡортостан Республикаһы территорияһында ла, телдәрҙең һәм мәҙәниәттәрҙең күп төрлөлөгөн төшөнөү.Туған (башҡорт) телде аралашыу ҡоралы, рухи-әхлаҡи үҫеш сығанағы буларак аңлау. Дөрөҫ һөйләү һәм яҙма телмәр - кешенең дөйөм мәҙәнилеге күрһәткесе булыуына төшөнөү. Телде танып белеүҙең төрлө ысулдарын (күҙәтеү, анализ, мини-тикшеренеү, проект) ҡулланыу. |
| Фонетика. Графика. Орфоэпия. Ҡабатлау,белемде системалаштырыу.Телмәр үҫтереү (5 с.) | Башҡорт теленең өндәр системаһы. ( 1-3-сө класта өйрәнгәндәрҙе системаға һалыу): һуҙынҡылар/тартынҡылар | Билдәләнгән параметрҙар буйынса һүҙ эсендә һәм һүҙҙән тыш өндәрҙе күҙәтеү, сағыштырыу, анализлау, классификациялау. График схемалар, |

| | | |
|---|---|---|
| | (уларҙың айырмалыҡтары һәм оҡшашлыҡтары); нәҙек/ҡалын һуҙынҡылар (сингармонизм законы); яңғырау/һаңғырау парлы һәм парһыҙ тартынҡылар. Алфавит. Уны ҡулланыу даирәһе. Һүҙҙең өн/хәреф анализы. Һүҙҙәге баҫымлы һуҙынҡының орфоэпик үҙенсәлектәре.Телмәр үҫтереү. Дәреслек иллюстрациялары һәм текстары. | таблицалар рәүешендә башҡорт теленең өн һәм хәреф системалары тураһында белемдәрҙе системалаштырыу. Уҡыу объекттары, тел күренештәре тураһында хәбәр итеү өсөн өндәр һәм хәрефтәр таблицаһын ҡулланыу. Һүҙҙең өн-хәреф график моделен төҙөү һәм уны телдән анализлау. Һүҙҙә баҫымдың интонация менән бәйле булыуын төшөнөү (ба'ҫма - баҫма' һ.б.). «Баҫымды ҡайҙа ҡуйырға? уйыны. Тексты күсереп яҙыу. Диктант яҙыу. Дәреслектәге иллюстрациялау һәм текстар менән эш: һөйләмдәрм, текстар төҙөү һ.б.. |
| Синтаксис. Орфография, пунктуация. Телмәр үҫтереү<br>(10 с.) | Ҡабатлау: башҡорт телендә һөйләм төҙөлөшөнөң үҙенсәлектәре; һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре. Тиң эйәләр һәм хәбәрҙәр.Һөйләмдә өндәш һүҙҙәр. Һөйләү телмәре һәм яҙма телмәр (ҡабатлау). Текст. Тексттың исеме. Тексттың мәғәнәүи өлөштәре. Өйрәтеү иншаһы, проект эше. Телмәр үҫтереү. Дәреслек иллюстрациялары һәм текст материалдары | Һөйләмде дөрөҫ итеп төҙөү ( ҡылымды һөйләм аҙағына ҡуйыу). Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәрен билдәләү. Туған (башҡорт) телде аралашыу сараһы булараҡ ҡулланыу. Кешенең дөйөм мәҙәнилеге күрһәткесе булараҡ туған телдә телдән иркен аралашыуҙың һәм яҙма телмәр үҫешенең мөһимлеген төшөнөү. Парҙар менән эш: тәкдим ителгән һүҙҙәргә синонимдар, антонимдар һайлау. Телмәрҙә фразеологизмдарҙы асыҡлау (ябай осраҡтар) һәм телмәрҙә ҡулланылышын күҙәтеү. Практик эш: телмәрҙә тиң эйә һәм тиң хәбәрҙәрҙең ҡулланылышы.. Алатмалы һүҙлек менән эшләргә өйрәнеү. Мәғлүмәт алыуҙа интернет селтәрен ҡулланыу. Дәреслектәге һүрәт сюжеты йәки бирелгән тема буйынса |

| | | |
|---|---|---|
| | | текст төҙөү.Инша яҙыу,проект эше ойоштороу. |
| Лексика. Телмәр үҫтереү (5 с.) | Һүҙҙең күп мәғәнәлелеге. Һүҙҙең күсмә мәғәнәһе. Синонимдар, антонимдар, омонимдар. Төп башҡорт фразелогизмдары | Күп мәғәнәле һүҙҙәрҙе күҙәтеү (ябай осраҡтар). Һүҙҙең күсмә мәғәнәһен аңлау. Парҙарҙа йәки бәләкәй төркөмдәрҙә өйрәнелгән теманы нығытыу буйынса аңлатмалы һүҙлек менән эшләү., Интернет селтәренән мәғлүмәт алыу мөмкинселектәрен ҡулланыу. Һөйләү һәм яҙма телмәрендә синонимдар, антонимдар, мәҡәлдәр, әйтемдәр ҡулланыу. Һөйләмдә һәм текста һүҙҙең күп мәғәнәлелеген асыҡлау. Дәреслектәге һүрәт сюжеты йәки бирелгән тема буйынса текстар төҙөү. |
| Морфология. Орфограммалар. Лексика. Телмәр үҫтереү (34 с.) | Һүҙ төркөмдәре. Исем.Ҡабатлау: исемдең грамматик билдәләре (һаны, заты, килештәре). Үҙләштерелгән һүҙҙәр (исемдәр). Өйрәтеү иншаһы. Телмәр үҫтереү. Дәреслектәге иллюстрациялар һәм текстар. | Парлап, бәләкәй төркөмдәрҙә өйрәнелгән теманы нығытыу буйынса эштәр башҡарыу: исемдәрҙең грамматик мәғәнәһе, һаны, килештәре, (сығыштар). Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә (исемдәрҙә) ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышын өйрәнеү. Исемдәрҙе телдән һәм яҙма телмәрҙә ҡулланыу. Инша яҙырға өйрәнеү. Дәреслектәге һүрәттәр һәм биремдәр буйынса текстар төҙөү. |
| | Сифат. Ҡабатлау: дөйөм мәғәнәһе, һорауҙары, телмәрҙә ҡулланыу. Сифаттарҙың яһалышы (ябай осраҡтар). Сифаттарҙың сағыштырыу дәрәжәһе. Телмәр үҫтереү | Сифаттың сағыштырыу дәрәжәһен белдереүсе һүҙҙәрҙе туплау, төркөмләү. Һүҙҙең мәғәнәһенән сығып уның ниндәй һүҙ төркөмөнә (исемме,сифатмы) булыуын асыҡлау. Парлап йәки төркөмдәрҙә бирелгән һүҙҙәрҙе сағыштырыу дәрәжәһенә ҡуйырға (ябай осраҡтар) күнегеү. Сифаттарҙы һүҙ төркөмө булараҡ тикшереү. Сифаттарҙы дәреслектәге һүрәттәр,текст |

| | | |
|---|---|---|
| | | материалдары буйынса һөйләмдәр,текстар төҙөүҙә файҙаланыу. Һүрәттәр һәм дәреслектең текст материалдары. Дәреслектәге иллюстрациялар һәм текст материалдары буйынса эш (дискуссия, диалог, һөйләмдәр.текст төҙөү) |
| | Алмаш: мәғәнәһе, һорауҙары, телмәрҙә ҡулланыу. Алмаш төркөмсәләре. Алмаш һәм исем.Зат алмаштарын текста нигеҙһеҙ ҡабатлауҙарҙы бөтөрөү өсөн ҡулланыу. Өйрәтеү иншаһы. | Текстан алмаштарҙы табыу. Алмаш төркөмсәләрен (зат, күрһәтеү, һорау алмаштарын) өйрәнеү (күҙәтеү, сағыштырыу). Ҙур булмаған тикшеренеүҙә ҡатнашыу: текста исемдәрҙең һан менән алыштырылыу осрағын күҙәтеү, уларҙың мәғәнәһен һәм һорауҙарын сағыштырыу. Һығымта яһау. Яҙма һәм һөйләү телмәрендә зат алмаштарын урынлы ҡулланыу ( текста нигеҙһеҙ ҡабатлауҙарҙы булдырмау маҡсатында ). Инша яҙыу. |
| | Ҡылым (ҡабатлау). Ҡылымдың мәғәнәһе, һорауҙары, грамматик билдәләре (һаны, заты, ваҡыты), ҡылымды телмәрҙә ҡулланыу. Тамырҙан ғына торған (тамыр) ҡылымдар. Ялғауҙар ҡушып ҡылым яһау (яһалма ҡылым). Ҡылымға морфологик анализ. Өйрәтеү иншаһы. Телмәр үҫтереү. Дәреслектәге иллюстрациялар | Ҡылымдың мәғәнәһе, һорауҙары, грамматик билдәләре (һаны, заты, ваҡыты), ҡылымды телмәрҙә ҡулланыу. Тамырҙан ғына торған (тамыр) ҡылымдарҙы таныу. Ялғауҙар ҡушып яһалма ҡылым яһау (ҡылымдарҙың яһалышы, ябай осраҡ). Ҡылымға морфологик анализ. Инша яҙырға өйрәтеү. |

| | | |
|---|---|---|
| | һәм текст материалдары. | |
| | Рәүеш. Мәғәнәһе, һорауҙары, телмәрҙә ҡулланыу. Рәүеш төрҙәре. Рәүештәрҙең яһалышы (ябай осраҡтар). Рәүеш һәм сифат (сағыштырыу). Уларҙың һөйләмдәге функцияһы. Өйрәтеү иншаһы. Телмәр үҫтереү. Һүрәттәр һәм дәреслектең текст материалдары. | Рәүештең мәғәнәһен аңлау, төрөн билдәләү, телмәрҙә ҡулланыу. Тамырҙан ғына торған, ялғауҙар ҡушылыу юлы менән барлыҡҡа килгән рәүештәрҙе таныу. Ҙур булмаған тикшеренеү эшмәкәрлеге: рәүештәрҙең һәм сифаттың оҡшашлыҡтары һәм айырмалыҡтары. Уларҙың һөйләмдәге функцияһы. Инша яҙырға өйрәтеү. Дәреслектәге текст материалдары, иллюстрация буйынса әңгәмә, дискуссиялар. |
| | Һан. Мәғәнәһе, һорауҙары, төрҙәре, телмәрҙә ҡулланылыуы. Һандарҙың яһалышы (ябай осраҡтар). Телмәр үҫтереү. Дәреслек иллюстрациялары һәм текст материалдары. | Һанды өйрәнеү: мәғәнәһе, һорауҙары, төрҙәре. Уны телмәрҙә ҡулланыу. Һандарҙың яһалышын (ябай осраҡтар) күҙәтеү. Дәреслектәге һүрәттәр, текст материалдарының йөкмәткеһе буйынса дискуссиялар, әңгәмәләр. |
| Уҡыу йылында үткәндәрҙе ҡабатлау (5 с.) | Фонетика, графика, орфоэпия. Синтаксис. Һүҙ төркөмдәре. | Өйрәнелгән уҡыу материалын ҡабатлау, нығытыу |
| Тикшереү эштәре (1-4 сирек) (4 с.) | Контроль диктант (65 - 70 һүҙ). Эште анализлау. изложение, инша (70 - 75 һүҙ). Эште анализлау. | Алынған белем, мәғлүмәтте практикала ҡуллана белеү. |
| Резерв (2 с.) | | |

| № | План.д ата | Фак тик дата | Дәрес темаһы | Иҫкә рмә |
|---|---|---|---|---|
| 1 | 1.09 | | Уҡымышлы булыу ни өсөн кәрәк? | |
| 2 | 6.09 | | Ҙур хәреф. Һөйләм. Һүҙбәйләнеш | |
| 3 | 8.09 | | Тикшереү эше. Инеш контроль диктант. | |
| 4 | 13.09 | | Баш хәреф. Кеше исемдәре. | |
| 5 | 15.09 | | Баш хәреф. Кеше фамилиялары. | |
| 6 | 20.09 | | Баш хәреф. Ер – һыу атамалары. | |
| 7 | 22.09 | | Ҙур хәреф. Хайуан ҡушаматтары. | |
| 8 | 27.09 | | Үҙ-ара һөйләшеү. Диалог. | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 9 | 29.09 | | Йәмғиәт урындарында осрашыу. Диалог. | |
| 10 | 4.10 | | Яҡын кешеләрҙе ҡотлау. | |
| 11 | 6.10 | | Әкиәт геройҙары минең тиҫтерҙәрем. Аралашыу этикеты. | |
| 12 | 13.10 | | Мәғлүмәт , белешмә эҙләү | |
| 13 | 18.10 | | Контроль диктант “Ҡарағай башында” | |
| 14 | 20.10 | | Диалог ҡороу. Әйтеш. Һынамыш. Мәҡәл-әйтемдәр. | |
| 15 | 20.10 | | Диалог ҡороу. Әйтеш. Һынамыш. Мәҡәл-әйтемдәр. | |
| 14 | 25.10 | | Диалог ҡороу. Әйтеш. Һынамыш. Мәҡәл-әйтемдәр. | |
| 16 | 27.10 | | Тикшереү эше. | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | | Эшкә анализ. | |
| 17 | 8.11 | | Иғлан. Белдереү. | |
| 18 | 10.11 | | Һөйләм. | |
| 19 | 15.11 | | Һөйләмдең баш киҫәктәре. Эйә, хәбәр. | |
| 20 | 17.11 | | Һүрәт буйынса өйрәтеү иншаһы.”Торналы күл” | |
| 21 | 22.11 | | Хәбәр һөйләм. | |
| 22 | 24.11 | | Өндәү һөйләм. | |
| 23 | 29.11 | | Һорау һөйләм. | |
| 24 | 1.12 | | Текст. Һорау, өндәү һөйләмдәр. | |
| 25 | 6.12 | | Комплекслы тикшереү эше. | |
| 26 | 8.12 | | Һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы | |
| 27 | 13.12 | | Ҡалын һәм нәҙек әйтелешле һүҙҙәр. | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 28 | 15.12 | | Ҡалын һәм нәҙек әйтелешле һүҙҙәр. | |
| 29 | 20.12 | | Беренсе ярты йыллыҡҡа административ контроль эш | |
| 30 | 22.12 | | Хаталар өҫтөндә эш | |
| 31 | 27.12 | | Һүрәт буйынса инша. “Елдерәләр саналар” | |
| 32 | 10.01 | | Һүҙҙе юлдан – юлға күсереү. | |
| 33 | 12.01 | | Уу-Үү хәрефе. | |
| 34 | 17.01 | | Һүрәт буйынса өйрәтеү иншаһы. “Шарлауыҡ янында” | |
| 35 | 19.01 | | Оо-Өө хәрефле һүҙҙәр. | |
| 36 | 24.01 | | Изложение “Терпе ҡыҙына күстәнәс” | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 37 | 26.01 | | Ээ хәрефле һүҙҙәр. | |
| 38 | 31.01 | | (э) өнө һүҙ уртаһында һәм аҙағында | |
| 39 | 2.02 | | Ы хәрефле һүҙҙәр | |
| 40 | 7.02 | | Тикшереү эше. Контроль күсереп яҙыу йәки диктант. | |
| 41 | 9.02 | | Й хәрефле һүҙҙәр. Уларҙың дөрөҫ яҙылышы. | |
| 42 | 14.02 | | Й хәрефле һүҙҙәр . Уларҙың яҙылышы. | |
| 43 | 16.02 | | Инша “Һаумы, Яңы йыл!” | |
| 44 | 21.02 | | (йа) өндәре ниндәй хәреф менән тамғалана? | |
| 45 | 28.02 | | (йу) өнө ниндәй хәреф менән тамғалана? Юю | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | | хәрефе. | |
| 46 | 1.03 | | (йу) өнө ниндәй хәреф менән тамғалана? Юю хәрефе. | |
| 47 | 6.03 | | (йэ) өнө ниндәй хәреф менән тамғалана? | |
| 48 | 13.03 | | (йэ) өнө ниндәй хәреф менән тамғалана? | |
| 49 | 15.03 | | Өсөнсө сиреккә административ контроль эш. | |
| 50 | 20.03 | | Хаталар өҫтөндә эш.Контроль күсереү | |
| 51 | 22.03 | | (йо) өнө ниндәй хәреф менән тамғалана | |
| 52 | 3.04 | | Һүҙ төркөмдәре. | |
| 53 | 5.04 | | Предметтың атамаһын белдергән һүҙҙәр. | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 54 | 10.04 | | Предметтың атамаһын белдергән һүҙҙәр. | |
| 55 | 12.04 | | Предметтың хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр. | |
| 56 | 17.04 | | Предметтың хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр. | |
| 57 | 19.04 | | Тикшереү эше | |
| 58 | 24.04 | | Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр. | |
| 59 | 26.04 | | Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр. | |
| 60 | 30.04 | | Һөйләмдең тиң киҫәктәре. | |
| 61 | 3.05 | | Һөйләмдең тиң киҫәктәре. | |
| 62 | 8.05 | | Ярҙамсы һүҙҙәр. | |
| 63 | 10.05 | | Ярҙамсы һүҙҙәр. | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 64 | 15.05 | | Йыллыҡ административ контроль эш. | |
| 65 | 17.05 | | Хаталар өҫтөндә эш. | |
| 66 | 20.05 | | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | |
| 67 | 22.05 | | Йыллыҡ тикшереү эше. | |
| 68 | 24.05 | | Эшкә анализ. | |